ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

4-10 август (урағай) 2018

№31 (813)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • Һатыуҙа хаҡы ирекле

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!** *Эргә-тирәләге таныштарығыҙға, туғандарығыҙға иҫкәртегеҙсе: 2018 йылдың икенсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө"гә яҙылып өлгөрмәһәләр, әле лә һуң түгел - 20 авгусҡа тиклем яҙылһалар, гәзитебеҙҙе сентябрҙән алдыра башлаясаҡтар. Шулай уҡ июль-август айҙарында элекке хаҡ менән, йәғни 560 һум 82 тингә, 2019 йылдың беренсе яртыһы өсөн дә гәзитебеҙгә яҙылып була. Ошо арауыҡта гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер, ғәҙәттәгесә, матур китапҡа өмөт итә ала.*

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**"Киске Өфө"нө һайлайым,** сөнки беҙҙең ынтылыштарыбыҙ бер



2

**Ҡала хәүефһеҙлеге...** юлдарға ла бәйле



4

**Балалы өйҙә ғәйбәт юҡ...** йәки Бәләкәс кеше мәҙәктәре



8

**Атайҙан күреп уҡ юналар,** әсәйҙән күреп күлдәк бесәләр хәҙер



12-13

**ТВ-программа** 14

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Һин ниндәй ғаиләне үҙеңә өлгө булараҡ ҡабул итәһең?

***Миңлегөл КАНСУРИНА, химия фәндәре кандидаты:*** Борондан башҡорт ғаиләһендә быуындар араһында ныҡлы бәйләнеш булған. Атайым ғаиләлә иң бәләкәй ул булыу сәбәпле, әсәйемде килен итеп тыуған йортона төшөргән. Шуға ла беҙ, мин, ҡустым һәм һеңлем, ҡартатайлы, ҡәртәсәйле булып үҫтек. Мәҫәлән, миңә сәғәт йөрөшөн, иҫәбен ҡартатайым өйрәтте. Ҡәртәсәйем бер намаҙын ҡалдырмаған дини кеше ине. Уны аятҡа саҡырһалар, мине лә үҙе менән ала. Ауылдың әбейҙәре менән сәй эсеп йөрөнөм мин шулай бала саҡта. Әле булһа ла ҡәртәсәйемдең ҡайһы бер әйткәндәрен, кәңәштәрен иҫкә төшөрәм дә, ауыл әбейе уны ҡайҙа белгән икән, тип уйлайым. Матурлыҡ серҙәре менән уртаҡлаша ине, битегеҙҙе эҫе һыу менән йыумағыҙ, тирегеҙ сирыша, тиер ине. Бөгөнгө йәштәрҙең ҡәйнә менән бер өйҙә һис йәшәгеләре килмәй. Ә әсәйем ҡәйнәһе менән ике тиҫтә йылдан ашыу бергә йәшәнеләр. Йолаға ярашлы, һәр кеме үҙ урынын белде, бер һүҙле булдылар.

Ғөмүмән, беҙҙең өйҙә балаларҙың буйын ғына түгел, күңелен дә үҫтерә белделәр. Белем алыуға ла иғтибар ҙур булды, эш эшләп үҫтек. Баҡса үҫтереү, емеш-еләкте, һыйыр ағын төрләндереп эшкәртеү, аш-һыу әҙерләүҙә әсәйемә тиңдәр һирәк, атайым да уңған, ҡулынан килмәгән эше юҡ. Йүнселдәр, донъялары матур. Йәшлек һөйөүен юғалтмай, бер-береһен ҡәҙерләп йәшәүҙәре үҙе бер матур күренеш. Ике яҡтан да бер туғандары менән татыуҙар, бергәләр. Ғаилә ошолай булырға тейеш, тип уйлайым, шуға ла уларҙан өлгө алам.

Бөгөн телмәребеҙҙә туғанлыҡ терминдары һирәк ҡулланыла. Мин, киреһенсә, әсәйем менән атайымдың туғандарға ҡайнаға, ҡәйенбикә һ.б тип өндәшкәнен күреп-ишетеп үҫтем. Иремдең ғаиләһендә лә шулай булып сыҡты. Беҙ рәхәтләнеп бер-беребеҙгә ҡәйнәм, ҡайным, ҡәйнеш, бикәс, балдыҙ, килен тип әйтәбеҙ. Юғиһә, хәҙерге ҡәйнәләрҙең кейәүҙәрен исеме менән атауын да күреп йөрөйбөҙ бит.

***Урал ЗАКИРОВ, инженер:*** Бөтөн бәхетле ғаиләләр бер-береһенә оҡшаш, тигән бит бөйөк яҙыусы. Миненсә, өлгө алырҙай бәхетле башҡорт ғаиләһендә атай абруйы бар, халыҡтың йолалары тотола, унда туған телдә һөйләшәләр. Әҙәпәхлаҡ нормалары ла ғаиләлә тәрбиәләнә. Ситтән ҡарағанда, былдай бәхетле ғаиләләр арабыҙҙа ифрат күп. Әммә мин шуны ла аңланым, ғаиләнең эсендә нимә барлығын башҡалар күрмәүе лә ихтимал. Шуға ла кемделер өлгө итеп ҡабул итеү дөрөҫ түгелдер ул.

Ғаиләнең ниндәй булыуының көҙгөһө булып улар тәрбиәләгән балалар тора. Кемдең кем булыуын белгең килһә, балаһына ҡара. Ҡурайҙы, боронғо йырҙарыбыҙҙы, халыҡ ижадын, тыуған ерен, туған телен ятһын тиһәң, быларҙы бала саҡтан һал күңеленә. Концертҡа, театрға бергә алып йөрө, исмаһам. Тәбиғәткә алып сыҡ, үләндәрҙе танырға өйрәт, тауҙарға артылығыҙ. Һәм быларҙың барыһы өсөн дә башлыса әсәй кеше яуаплы. Шуға кәләш һайламағыҙ, егеттәр, буласаҡ балаларығыҙҙың әсәһен һайлағыҙ. Яратам, тип баш юғалтыуҙы ата-бабалар әллә ни хупламаған. Дәрәжәле вазифалар йөкмәгән абруйлы шәхестәребеҙ араһында бынамын тигән балалар үҫтереүселәр күп. Белемле, илһөйәр булыуҙары менән бер рәттән, ололарҙы ололай, кеселәрҙе кеселәй беләләр. Танау буйынан ҡарап йөрөмәйҙәр, ихластар, алсаҡтар. Милләт өсөн дә эшләйҙәр. Бына ошондай балалар тәрбиәләгән ғаиләләргә эйәрергә була, исмаһам.

(Дауамы 2-се биттә).



*Баймаҡ районынан Гөлсиә һәм Илфат Мусиндарҙың татыу, бәхетле ғаиләһендә Айзилә һәм Нурсилә исемле ҡыҙ балалар, Нурсолтан атлы малай үҫә.*

2018 Ғаилә йылы Год семьи

12+

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР



# СҮП-САР АТАМАЛАР

**Урамдағы төрлө яҙыуҙарҙы уҡый алмай, аңлай алмай, бөтөнләй баштар ҡата. Сит ил атамаларын сикләргә кәрәктер, тип уйлайым. Үҙенең тыуған телен дә, рус телен дә тулыһынса, ысын мәғәнәһендә төптән белмәгән үҫмерҙәргә теләһә ниндәй мәғәнәһеҙ атамалар ҙур зыян килтерә, уларҙың баштарына сүп-сар тултыра бит.**

Сит телдә яҙылған һүҙҙәрҙе уҡыған һайын бер актрисаның радио аша һөйләгән иҫтәлеге хәтергә килә. Бер саҡ ул сит илгә сәйәхәткә сығырға әҙерләнә. Сит телдәге яҙыу яҙылған футболка һатып алып кейә. Ләкин ҡала урамдарына сыҡтымы, ирҙәрҙең әленән-әле һүҙ ҡушыуына, нимәлер ишаралауына аптырап бөтә. Танышына: "Бында ирҙәр шундай сәйер. Күҙҙәре йылтырап, миңә ҡулдарын һуҙырға ғына торалар", - тип зарлана. Танышы: "Бәй, һинең футболкаңда "Мин ирҙәрҙе яратам" тип яҙылған бит", - тип көлә. Актриса: "Ә мин "Мин кешелек донъяһын яратам" тип яҙылған икән тигәйнем ул яҙыуҙы", - тип көрһөнә.

Шағирыбыҙ Шәйехзада Бабич та наҙандарҙан көлөп, "Сеп-сей наҙан" шиғырын яҙған бит:

*Бер әҙәм: "Русса беләмһең һин?" - тип*
*Һораны; мин әйттем: "Беләмен мин", - тип.*
*"Йә, һөйләп ҡара!" - тигәс ул, мин тинем:*
*"Знакум, я бит ничауа незнаем!"*
*"Шәп икәнһең руссаға, Шайҡулзадам,*
*Кем өйрәтте, әйтсе?" - тине ул әҙәм.*
*Мин был һүҙгә аптырап торҙом; ләкин*
*Аңланым тиҙ: ул икән сеп-сей наҙан!*

"Культура" каналындағы "Разночтение" тапшырыуында шағир, журналист Тимур Кибиров әйткәнсә: "Асыҡ хулиганлыҡ арҡаһында йәштәрҙең, үҫмерҙәрҙең телмәре ярлылана, матур һүҙ ҡиммәттәре юйыла, онотола". Эйе, бик тә дөрөҫ: хаталы яҙыуҙарҙан - сүп-сар атамаларҙан ҡалабыҙҙы таҙартайыҡ. Шағирыбыҙ Рәми Ғарипов өндәгәнсә, "Телебеҙҙең ҡәҙерен беләйек!" Уның "көслө лә ул, бай ҙа, яғымлы ла" икәнен онота күрмәйек.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Һин ниндәй ғаиләне үҙеңә өлгө булараҡ ҡабул итәһең?

**(Башы 1-се биттә).**

***Гөлнәзирә ЗӘЙНУЛЛИНА, йәш әсәй:*** Мин үҙем килен булып төшкән ғаиләне үрнәк итеп килтерер инем. Сөнки улар балаларына матур тәрбиә бирә алғандар. Инәһе көслөнөң - иләүе көслө, тип халыҡ ҡалай тапҡыр әйткән, тип уйлайым йыш ҡына. Ҡәйнәм көслө рухлы, һәр нәмәгә үҙенең фекере бар, һәр осраҡта ла ғәҙел булып ҡала белә. Ундай ғаилә, ундай әсәй, ундай ҡәйнә башҡа юҡтыр ул. Күп һөйләмәй, ғәйбәткә урын ҡалдырмай, ундай һүҙҙе тыңлап та тормай. Үҙебеҙ ҙә өс балаға атай-әсәй һәм улар үҫә барған һайын дөрөҫ тәрбиә биреүҙең ни тиклем мөһим икәнен аңлайһың. Шуға ла мин һуңғы ваҡытта матур ғаиләләрҙең балаларын нисек тәрбиәләүенә иғтибар итергә ғәҙәтләндем. Мәҫәлән, ҡайным менән ҡәйнәм хеҙмәт тәрбиәһенә ҙур урын бүлгән. Уларҙың балалары бер ҡасан да юғалып ҡалмаясаҡ, бөтөн эште лә эшләй беләләр. Кемдер үҙ ғүмерендә бер йорт та һалып инә алмай. Ә уларҙың улдарына бындай эш бер ни түгел, тотоп эшләй ҙә ҡуялар. Ҡайным менән ҡәйнәм байрам, уйын-көлкө тип артыҡ иҫтәре китеп бармай. Улар өсөн иң мөһиме - ғаилә байрамдары. Ғаиләлә атай һүҙе, әсәй һүҙе ҙур әһәмиәткә эйә, бындай кәңәш-теләктәргә мотлаҡ ҡолаҡ һалына. Ҙурайышып бөтһәләр ҙә, атай-әсәй менән ултырып кәңәшләшеү матур йолаға әүерелгән.

Шулай уҡ бер туған апайымдың ғаиләһе минең өсөн өлгө. Улар урыҫтар араһында йәшәп, ғаиләлә милли рухты һаҡлап ҡала алдылар. Өйҙә балаларҙың береһе лә урыҫ телендә һүҙ һөйләмәй. Ә мәктәптә барыһы ла алдынғы уҡыусы. Урыҫ телен белмәү арҡаһында уңышҡа өлгәшә алманым, тигәндәрен күп ишеткәнем бар. Шуға ла балам ыҙаламаһын, уны урыҫса ғына һөйләштерәм, тиҙәр. Был фекерҙең дөрөҫ түгеллеген апайымдарҙың ғаиләһенә ҡарап аңларға була. Бөгөн йәш ғаиләләр балаларына бөтөнләй эш ҡушмаһа, улар, киреһенсә, балаларын эшләтеп үҫтерә.

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# "КИСКЕ ӨФӨ"НӨ ҺАЙЛАЙЫМ,

## сөнки беҙҙең ынтылыштарыбыҙ бер



**Бер ваҡыт ейәне олатаһына яңы ғына һатып алған китабын күрһәтеп маҡтанмаҡсы булған. Олатай кеше китапты ҡулына алып ҡараған, ҡайһы бер биттәренә күҙ һалған. Уның йөҙөнә яҙылған ризаһыҙлыҡты күргән ейәне: "Нишләп минең китабымды күреүҙән кәйефең төштө?" - тип һораған. "Һайлау - ул ынтылыштар һөҙөмтәһе. Әгәр ҙә һин осоусы булғың килһә, самолеттар тураһындағы китапты һайлар инең. Ғалим булам тиһәң, фән менән бәйле әсбап алыр инең. Әммә һин үҙеңә ғәйбәттәр, төрлө ахмаҡ ҡылыҡтар яҙылған китапты һайлағанһың. Шуға хәүефләнәм - һин киләсәктә кем булырға хыялланаһың һуң?"**

Ошо хикмәтле хикәйә мине ныҡ тетрәндергәйне. Ысынлап та, һайлаған әйберҙәрең, дуҫтарың, хатта һөнәрең, күңел асыу ысулдарың һинең эске булмышыңды белдереп тора бит. Күршем, минең йәштәге ҡатын, телевизорҙан бер туҡтауһыҙ сериалдар ҡарай, шундағы уйҙырма матур тормош уның күңелен йылыта. Кемдер иһә яңылыҡтар тыңлар өсөн генә телевизорын ҡабыҙа. Баҫмаларҙа нимә уҡырға теләүең дә эске күңел торошонан киләләр. Шуға ла бит тематик журнал-гәзиттәр ҙур һорау менән файҙалана. Элек хатта ауылдарҙа "Советский экран" тигән журналды уҡыйҙар ине. Актерҙарҙың ижады, тормошо тураһында белеп, инәйҙәр сәй эскәндә һөйләп ултыра инеләр. "Огонек" журналы күптәрҙә булды. Бөгөн иһә һайлау мөмкинлеге тағы ла киңерәк. Ана, ҡыҙымда күҙгә һымаҡ йылтыр шыма ҡағыҙға баҫылған, башлыса төрлө рекламанан, кейем-һалым, косметика һүрәттәренән торған журналдар күренгеләп ҡала. Ҡағыҙ нимәне генә күтәрмәй.

Ошо мәғлүмәти киңлектә үҙемдең күңелемә хуш килгән баҫма булыуына ҡыуанып бөтә алмайым. "Киске Өфө" тураһында һүҙем. Бөтөн нәмә бар бында минең өсөн. Тарихы ла, аҡыллы фекерҙәре лә, абруйлы шәхестәр менән әңгәмәләре лә. Йәштәр бөгөн ҡалай шәп, тип һоҡланам боронғо башҡорт шөғөлдәрен тергеҙгән эшҡыуарҙар тураһында уҡып. Киләсәгебеҙ бар, тип шатланам, балалар араһында ойошторолған сараларҙы күреп. Иң мөһиме, "Киске Өфө" уларҙың араһында ҡайнай, беҙгә һөйләй, шул рәүешле беҙҙе бер башҡорт мөхитенә берләштереп тә ҡуя. Бына ул йәштәрҙе мин үҙем шәхсән белгән кеүекмен хәҙер. Уларға ҡарап, үҙем дә дәртләнеп йәшәй башлайым.

Мин "Киске Өфө"нө һайлайым, сөнки беҙҙең ынтылыштарыбыҙ бер - халҡыбыҙ һәр заманда ла аңлы, рухлы, аҡыллы, уңышлы булһын тигән теләк берләштерә беҙҙе.

**Әлиә ДӘҮЛӘТОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев Facebook селтәрендә тиҙҙән велосипедтарға һалым индереүҙәре тураһында яңылыҡҡа үҙ фекерен белдерҙе. "Беҙ велосипед хужаларына ҡағыласаҡ транспорт һалымы йәки башҡа йыйымдарға бәйле республика ҡануниәтенә үҙгәрештәр индереүҙе планлаштырмайбыҙ. Бындай һалым тураһында идея бик сәйер тойола", - тип билдәләне Башҡортостан парламенты спикеры.

✓ Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһы алтынсы саҡырылыш республика Дәүләт Йыйылышына һайлауҙа бер мандатлы округтар буйынса кандидаттар һәм партиялар исемлеген теркәүҙе тамамланы. Ҡоролтайға һайлау алды ярышында берҙәм республика округы буйынса алты партия ҡалды: ЛДПР, Ғәҙел Рәсәй, "Берҙәм Рәсәй", "Рәсәй патриоттары", "КПРФ", "Йәшелдәр". Партия исемлектәре буйынса бөтәһе 736 кеше теркәлгән. 2018 йылдың 31 июленә ҡарата, бер мандатлы округтар буйынса 289 кандидат теркәлгән.

✓ Башҡортостанда 2018 йылдың 1 авгусынан 2019 йылдың 1 авгусына ҡәҙәр төбәк биләмәһендә һунар ресурстары аулауҙың лимиты раҫланды. Республика Башлығының бойороғонда: "Башҡортостан Республикаһы биләмәһендә 2018 йылдың 1 авгусынан 2019 йылдың 1 авгусына ҡәҙәр осорҙа 1692 баш мышы; 1356 баш себер ҡоралайы, 20 һеләүһен, 295 һоро айыу, 549 бурһыҡ иҫәбендә һунар ресурстары аулауҙы раҫларға", - тип билдәләнгән.

✓ Республикала агросәнәғәт комплексында кооперативтарға һәм башҡа кесе хужалыҡ формаларына булышлыҡ итеү дауам итә. Уларҙың үҫешенә дәүләт ярҙамы бөгөнгө көнгә 700 миллион һумдан артып киткән. Һуңғы ике йылда республикала кооперативтар һаны өс тапҡыр артҡан. 2018 йылда республика ҡаҙнаһынан граждандарҙың кооперативтар булдырыу буйынса табыш килтереү проекттарын ғәмәлгә ашырыуға 300 миллион һумдан ашыу бүленә.

✓ Башҡортостандың Сауҙа буйынса дәүләт комитеты уҡыу йылы башланыр алдынан балалар өсөн тәғәйенләнгән тауарҙарҙың, мәктәп кәрәк-яраҡтарының сифаты һәм хәүефһеҙлеге, белем биреү өлкәһендәге түләүле хеҙмәттәр һорауҙары буйынса "ҡыҙыу элемтә" эшләнә. Эш көндәрендә (347) 218-09-78 телефоны буйынса шылтыратҡандарға республиканың Сауҙа һәм ҡулланыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлау буйынса дәүләт комитеты белгестәре бушлай консультация бирәсәк.

**✓ Һине кеше итеп формалаштырған, эшләткән, йәшәткән, хистәр кисерткән, ҡәҙерле миҙгелдәр, мәлдәр тойҙорған заманыңа ла рәхмәтле булыуыңды белгерт. Бынан заман түгел, ә һин үҙең ҡәнәғәтлек аласаҡһың.**



УЙЛЫҒА - УЙ

# РӘХМӘТЛЕ БУЛ!

## Кешеләргә лә, заманға ла...

**Кемгәләр ысын күңелдән рәхмәт әйтеү йәки рәхмәтле булыу тойғоһо ошондай уҡ рәхмәттәр әйтерлек тағы ла күберәк ыңғай хәл-ваҡиғалар, яҡты эмоциялар алып килеүсе бик көслө хис ул. Үкенескә күрә, кеше һәр ваҡыт үҙенә етмәгән нәмәләр хаҡында уйлап, ҡәнәғәтһеҙ көн итеүгә дусар һәм шул кәйефе аҫтында рәхмәт әйтергә тейешлеләрен күрмәй. Ә бит рәхмәтле булыу - ул яҡшыға ғына шөкөр итеүҙе аңлатмай, үҙеңдең барлығыңа, бирелгән һабаҡтарға, тәжрибәгә лә рәхмәтле булыу зарур.**

Булғанға шөкөр итә, барлығына рәхмәтле була белмәү - ул тар күңеллелек, ҡомһоҙлоҡ билдәһеләр ул барыбер. Бының менән үҙ мөмкинлектәрен тағы ла тарайта, ҡыҫа төшкәнлеген аңламай, ғәҙәттә, кеше. Даниэль Дефо тигән психолог та "Һәр ваҡыт нимәләр етмәүгә, юҡлыҡҡа зарланыу рәхмәтле була белмәү билдәһе", тип яҙа.

Шөкөр итә белеү бик мөһим тойғо, хатта холоҡ һыҙаты. Был һыҙат тәрбиәнән дә, йәки кешенең аң кимәленең яҡшы үҫешкәнлегәнән дә, шулай уҡ тормош фәлсәфәһен төшөнгән булыуҙан да барлыҡҡа килә.

Бәләкәй генә яҡшылыҡ өсөн дә рәхмәтле була белеү кәрәк. Шулай уҡ иғтибар итмәй өйрәнгән, күҙгә эленмәй ҡала барған изге эштәрҙе лә аңғарып барыу мотлаҡ. Мәҫәлән, көн дә иртән күҙ алдығыҙҙа йөрөгән, әммә һеҙ уға бер ваҡытта ла һүҙ ҡушмаған урам һепереүсегә. Ул бит һеҙҙең эргә-тирәне, һеҙҙең мөхитте таҙартыуға көс һала. Ни өсөн һеҙ уға рәхмәтле булмаҫҡа тейеш? Эше өсөн аҡса алһа һуң. Һеҙҙен рәхмәт әйтеп, маҡтап ебәреүегеҙ уны бер башҡа үҫтереп ебәрәсәк, беренсенән. Икенсенән, уға рәхмәтегеҙҙе белдереп, һеҙ әлеге көнөгөҙҙө ыңғай тулҡындарға көйләп ебәрәсәкһегеҙ. Һеҙҙең рәхмәтте ишеткән хеҙмәткәрҙең дә күп нәмәгә фекере үҙгәрәсәк.

Был һынауҙы эшегеҙҙә лә ҡуллана алаһығыҙ. Һеҙгә яҡшы мөнәсәбәттә булған коллегаларығыҙға яйын тура килтереп кенә: "Апай (ағай, һеңлем, фәлән фәләнович), һеҙ миңә һәр ваҡыт яҡты йөҙ күрһәтәһегеҙ, эшкә өйрәтәһегеҙ, ваҡытығыҙҙы бүләһегеҙ, һеҙгә шундай рәхмәтлемен", тип әйтеп ҡарағыҙ әле. Был кеше бер ваҡытта ла һеҙгә ҡаршы сығыр дошман була алмаясаҡ. Сөнки рәхмәтле була белеүҙең көсө бик ҙур ул.

Хатта тормоштағы, эҙмыштағы кире хәл-күренештәрҙе лә дөрөҫ баһалай белеп өйрәнергә була. Ата-әсәйең аҡсаға тейендереп үҫтермәгән икән, һин уны эшләп табырға өйрәнгән. Эшкә ҡушып, уйнарға ваҡыт ҡалдырмағандар икән, эш рәтен белгәнһең. Ҡаршылыҡтар күп икән, көслөрәк, сабырыраҡ, аңлыраҡ була бараһың. Яҙмышты, йыһанды алға хәрәкәт итеү, үҫешеү өсөн биргән тәжрибәләре, Аллаһты һулыш алырға, күрергә, ишетергә биргәне өсөн дә тәбрикләйҙәр. Үҙеңде лә нимәләргәләр өлгәшкәнең өсөн эстән маҡтап ал. Артыҡ ҙур маҡсаттар ҡуйып, туҡтауһыҙ эҙгәләмә. Хәлеңдән килмәстәйгә ынтылып, үҙеңә ышаныңды юғалта күрмә. Уңышһыҙлыҡтар өсөн тәнҡитләп, мин-минлегеңде тапап ташлама. "Был ниндәй кире донъя? Барыһы ла насар, барыны ла миңә ҡаршы!" тип ярһыу бары нервыларыңды ҡаҡшата һәм йыһандың изгелеккә, яҡшылыҡҡа, ыңғай тойғоларға көйләнгән циклынан ситләштерә генә. Аниһә: "Әл дә һаумын, яҡындарым имен, баш һалыр урыным, ҡабыр ризығым бар - ҡәнәғәтмен", тип буйһоноу, риза булып күнеү, рәхмәтле булыу мотлаҡ икенсе мөмкинлектәрҙе асыуға форсат бирәсәк.

Әлеге көндә финанс, эмоциональ, мораль ҡәнәғәтһеҙлек кисерәһегеҙ икән, һеҙ уны барыбер бер көндә йәки ҡыҫҡа ваҡыт эсендә генә хәл итә алмайһығыҙ. Бәлки ул процесс оҙаҡҡа ла һуҙылыр. Шул ваҡыт буйына көйөнөп, эске күңелһеҙлегегеҙҙе тышҡа сығарып, һәр ваҡыт негатив хәбәрҙәр генә һөйләп тик йөрөйһөгөҙмө ни? Ә булғанына, әлеге торошоғоҙға рәхмәтле булыу өсөн ваҡыт кәрәкмәй. Һеҙ уны хәҙер үк эшләй алаһығыҙ. Был ғәҙәткә ҡапылда күнегә алмаһағыҙ, рәхмәттәр дәфтәре башлағыҙ. Унда әлеге мәлдә һеҙ рәхмәтле булған хәлдәрҙе теҙеп яҙығыҙ. Унан киләсәктә нимәләргә рәхмәтле булыр инегеҙ - шуларҙы билдәләп сығығыҙ. Ваҡытығыҙ булғанда был дәфтәрҙе ҡулға алып, уҡып, өҫтәп, байытып барырға була. Ул саҡта һеҙ яҡшы тойғоларығыҙ, эштәрегеҙ хаҡында күберәк уйлай башлаясаҡһығыҙ, үҙегеҙҙе йәлләүҙән, башҡаларҙы ғәйепләүҙән туҡтап, тартыу законын эшләтеп ебәрәсәкһегеҙ.

"Хыял өсөн дә рәхмәтле булығыҙ. Аҡса бирепп торған, ярҙам иткән кеше хаҡында яҡшы уйҙа йөрөгөҙ. Сәйгә саҡырғанға, аҙығы менән бүлешкәнгә мулдыҡ теләгеҙ. Иҙән йыуып сыҡҡан балағыҙға "был уның балалыҡ бурысы" тип ҡарамағыҙ, ә рәхмәт әйтегеҙ, сәләмәтлек теләгеҙ. "Миңә һине биргән Аллаһҡа мең рәхмәт", тип, уға ишеттереп ҡабатлағыҙ. Аяҡ осоғоҙҙа уйнаған бесәй балаһына ла ошолай һеҙҙе һоҡландырғаны, яраттырғаны өсөн тәбрикле булыуығыҙҙы белдереп, һыйпап ебәрегеҙ. Ғөмүмән, ошо рәхмәтегеҙҙе һүҙ, ҡараш, ҡылыҡ һәм уй аша белдереп барығыҙ. Онотмағыҙ, күҙ йоммағыҙ, "һуңынан" тип кисектермәгеҙ, тартынмағыҙ, йәшермәгеҙ, аңламаҫтар тип ҡурҡмағыҙ - белдерегеҙ рәхмәтегеҙҙе", - тигән кәңәштәрен бирә үрҙә телгә алған психолог та.

Рәхмәтле булырға өйрәнеү һинең эске донъяңды ла тәртипкә һала. Уйҙарың ағара, донъяға ҡарашың яҡтыра, аураң таҙара. Кешеләрҙе үҙенә ылыҡтырыу көсөң арта, уларҙың ышаныусын, һөйөүен яулауға шансың арта һ.б.

Рәхмәтле торошта йәшәргә, бик булмаһа, шуға өйрәнергә тырышырға кәрәк. Ҡәнәғәтлек - һөйөүҙең, яратыуҙың иң төп өлөшө ул. Һин бит кешенең ҡылыҡтары, төҫө, ҡарашы йәки башҡа берәй яғы менән ҡәнәғәт булмаһаң, уны ярата ла алмайһың. Кем менәндер, нимә менәндер ҡәнәғәт булып, шул ҡәнәғәтлекте эстән кисереп, һин ул кешегә лә, үҙеңә лә йыһандың ыңғай энергияһын юллайһың. Был энергия һинең үҙеңә лә, ул кешегә лә мотлаҡ уңыш, бик булмаһа, яҡшы ваҡиғалар алып киләсәк. Миҫал эҙләп алыҫ китергә лә кәрәкмәй. Ҡатын иренән, уның үҙенә, балаларына ҡарата мөнәсәбәтенән ҡәнәғәт икән, ул ире хаҡында гел яҡшы уйҙа йөрөй. Ире ҡайҙалыр китһә, имен ҡайтыуын, һау булыуын теләй. Йәмәғәте берәй эш башлаһа, уға юлдар асылыуын, ауырлыҡтары булһа, ыңғай хәл ителеүен һорап ялбара. Ул быны эстән уйлап, ыңғайға юрап йөрөп, шундай көслө энергетика барлыҡҡа килтерә һәм был көс ирен күп ҡаршылыҡтарҙан һаҡлап ҡаласаҡ та. Был рәхмәтле булыуҙың бер күренеше. Ә ҡәнәғәтһеҙ ҡатындың уйҙары ла тик ҡара була, ул ирен эстән дә, кешегә һөйләп тә, әрләп, яманлап та, уның барлыҡ юлдарын яба, эштәрен уңышһыҙлыҡҡа көйләй. Ғәҙәттә, өйҙәгеләре бәхетле булмаған ирҙәр үҙҙәре лә карьерала ла, шәхси тормошта ла бәхетле була алмай. Был тәңгәлдә ҡатын-ҡыҙҙың ризалығы, рәхмәтле булыуы бик ҙур роль уйнай. Ҡатыны ҡәнәғәт булһын өсөн иргеттең үҙенә лә мәрхәмәтлек, кешелеклек кеүек ҡылыҡтар аша яҡындарының һөйөүен яулау зарур.

Заманды ла әрләү урынһыҙ. "Элек шулай ине, хәҙер былай", тип ризаһыҙлыҡ сәсеп йөрөү ҙә йәшәгән заманыңа рәхмәтле була белмәүҙең бер миҫалы. Сағыштырыу күп осраҡта һеҙҙең файҙаға түгел. Заманды, йәшәйеште, эҙмышты, үҙеңде һәм башҡаларҙы икенселәр менән сағыштырыу үҙеңде булғандарыңдың етешһеҙлектәрен генә күрһәтә, ә фәһем алырға ярҙам итмәй. Шунлыҡтан, һине кеше итеп формалаштырған, эшләткән, йәшәткән, хистәр кисерткән, ҡәҙерле миҙгелдәр, мәлдәр тойҙорған заманыңа ла рәхмәтле булыуыңды белгерт. Бынан заман түгел, ә һин үҙең ҡәнәғәтлек аласаҡһың. Шулай итеп, әйләнә донъяға ҡәнәғәтлек сәсеп, уның менән изгелек телеңдә һөйләшеп ғүмер итә беләйек.

**Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР



# КҮҘӘТЕҮҘӘР

***52-се күҙәтеүем.*** "Юлдаш" радиоһына 17 йәш тулып киткән икән. Балиғлыҡ йәше. Әсәйем мәрхүмә ғүмеренең һуңғы 5 йылын түшәктә ятты. Тәүлек әйләнәһенә "Юлдаш"ты тыңлап, баҡыйлыҡҡа ла уның һөйләүе аҫтында күсте. Үҙем был радионы иртәнсәк тыңларға яратам. Йәмилдең, Филүстең, Ғәзизден тауыштары яңғырау менән йәшәгеләр килеп китә! Афарин уларға! Егеттәр үҙенең ихласлығы менән күптәрҙең йөрәген яулап, илебеҙ киңлегендә туған телебеҙҙә аралашыу мөхитен барлыҡҡа килтерҙе. Һәр кемдең "Юлдаш" аша үҙенең тауышын яңғыратырға тырышыуы ла күп нәмә хаҡында һөйләй. Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында һүҙ атҡарыусылар ҙа радио аша әҙәби башҡорт телендә һөйләргә ынтыла икән, егеттәр дөрөҫ юлда бара!

***53-сө күҙәтеүем.*** Уҡытыусы һөнәре Хоҙайҙан, тиҙәр. Дөрөҫтөр. Сөнки тәүгеһе Хоҙайҙан булһа, башҡа һөнәрҙәр уҡытыусынан. Уҡытыусыны беҙ мәктәптә һабаҡ биреүсе, дәрес уҡытыусы кеше тип кенә аңлайбыҙ, әммә уның мәғәнәһе киңерәк. Халҡыбыҙҙа "Үҙеңдән башҡаны әүлиә тип бел" тигән әйтем бар. Ысынлап та, һәр кем беҙгә һабаҡ бирә. Хатта беҙ яуыз, насар кешегә ҡарап та, уның кеүек булырға ярамай, тигән ғибрәт-һабаҡ алабыҙ. Тимәк, насар кеше лә беҙгә уҡытыусы.

Тағы бер ҡыҙыҡлы фекер. Режиссер Айрат Абушахманов һөйләгәйне. Польшала Люпа тигән бер режиссер биш йыл буйы режиссерҙар әҙерләгән. Уҡыуҙы тамамлар алдынан диплом спектаклендә уҡытыусы студенттарына шундай шарт ҡуя: спектакль башланыр алдынан улар мотлаҡ рәүештә сәхнәгә табут сығарырға тейеш була. Табутта "Люпа" тип яҙылған. Бында шундай мәғәнә һалынған: һин биш йыл үткәс, уҡып сыҡҡас, уҡытыусыңды ерләргә тейешһең. Шулай итмәһәң, һин ғүмерең буйына уҡытыусыңдың хыялдарын тормошҡа ашырырға тейеш булаһың. Ул сағында үҙ юлың булмай.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова Өфө сәнғәт училищеһы (колледжы) коллективын яңы директор менән таныштырҙы. Ул - Ринат Халиҡов. Ринат Рифат улы Халиҡов 1979 йылда Ишембай районында тыуған. Өфө сәнғәт училищеһын һәм Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтын тамамлаған. Өфөлә Ленин районының Балалар ижады үҙәгендә эшләгән, Өфө сәнғәт училищеһында уҡытҡан һәм директор урынбаҫары булған. 2015 йылдан Нариман Сабитов исемендәге Балалар музыка мәктәбен етәкләгән.

✓ Берҙәм дәүләт имтиханын өҫтәмә ваҡытта (5-14 сентябрҙә) ҡабаттан тапшырыу өсөн Башҡортостандың сығарылыш уҡыусыларына гариза яҙырға кәрәк. Ҡабул итеү дүшәмбе, 6 августа башлана һәм 20 августа тиклем дауам итә. 4 сентябрҙә - рус теленән, 7-һендә - база кимәлендәге математиканан, 15-ендә рус теленән һәм математиканан берҙәм дәүләт имтиханы уҙа.

✓ Тағы ла бер авиакомпания көҙҙән Грузияға тура рейстар башҡара башлай. Был хаҡта "ЮТэйр" хәбәр итә. 2018 йылдың июлендә ташыусы Росавиациянан Башҡортостандың баш ҡалаһынан Кутаиси ҡалаһына осоштарға рөхсәт алды. 1 августа авиакомпания ведомство менән осоштарҙың ваҡыты (аҙнаһына ике тапҡыр) һәм һауа судноһының тибы (Boeing 737-500) тураһында һөйләшеп килеште.

✓ Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә республика Хөкүмәте булышлығында танылған башҡорт шағирәһе Тамара Ғәниеваның һайланма әҫәрҙәре баҫылып сыҡты. Китаптың тиражы - 1000 дана, шиғриәт һөйөүселәрҙең уны киләһе аҙнанан "Китап" магазинында һатып алыу мөмкинлеге бар.

✓ Башҡортостандың 32 районында ужым культураларын урып-йыйыуға төштөләр, тип хәбәр иттеләр төбәктең Ауыл хужалығы министрлығында. "Дөйөм алғанда, бөгөнгә республикала 41,6 мең гектар ужым арышы, бойҙай һәм тритикале сабылған. Был - бөтә майҙандарҙың 11 проценты. 1 августа Башҡортостанда 23 мең гектар ашлыҡ һуғылған. Республика игенселәре 49 мең тоннанан ашыуҙы һуғып алған да инде, гектарынан уртаса уңыш - 21,4 центнер", - тип белдерҙе аграр ведомстволың матбуғат секретары Алмаз Ғәлимов.

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

**Ҡала хакимиәтенең сираттағы кәңәшмәһе мэриялағы үҙгәрештәр менән таныштырыуҙан башланды. Хәҙер сити-менеджерҙың йәмәғәт транспорты үсеше мәсьәләләре менән шөғөлләнгән урынбаҫары буласаҡ. Был вазифаны быға тиклем ҡала тормошо эшмәкәрлеген тәьмин итеү идаралығы начальнигы вазифаһын биләүсе Андрей Федосов башҡарасаҡ.**

# ҠАЛА ХӘҮЕФҺЕҘЛЕГЕ...

## юлдарға ла бәйле




Мәғлүм булыуынса, Өфө алдында заманса йәмәғәт транспортын үҫтереүҙең мөһим бурысы тора һәм был тема бер бөгөн генә көн үҙәгенә сығарылмай. Быға тиклем ҡулланылған классик транспорт төрҙәренең ваҡыты үткәнлектән, был өлкәлә ниндәйҙер һынылыш булырға тейешлеге көн кеүек асыҡ. Бының өсөн инвестициялар йәлеп итергә, күсмә состав, заманса экологик, электр, икенсе төрлө әйткәндә, ер өҫтөндәге метро транспорты эшләүсе федераль корпорациялар менән бәйләнештә булырға кәрәк. Был иһә айырым статус, айырым профессионализм һәм даими бәйләнештә эшләүҙе талап итә. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте менән дә тейешле кимәлдә эшмәкәрлек алып барыу зарур, сөнки уларҙың ярҙамынан башҡа ҡалала заманса йәмәғәт транспорты системаһын булдырыу мөмкин түгел. Гәзитебеҙҙә хәбәр итеүебеҙсә, Астанала эстакадала тиҙ йөрөшлө трамвай проекты тормошҡа ашырыла. Әлегә уның беренсе сираты ғына төҙөлә, хаҡы 2 миллиард евро. Был проектты тормошҡа ашырыу метро төҙөүгә ҡарағанда 2,5 тапҡырға арзаныраҡ һәм ҡулланылышы буйынса күпкә хәүефһеҙерәк, ышаныслыраҡ һәм замансараҡ. Муниципалитет йәмәғәт транспортын үҫтереү буйынса күп варианттар әҙерләгән, уларҙың барыһын бергә туплап, республика Хөкүмәтенә тәҡдим итәсәктәр.

Шулай уҡ хакимиәттә барлыҡҡа килгән икенсе яңы вазифа - ҡала берләшмәләре менән бәйләнеш булдырыу буйынса хакимиәт башлығының кәңәшсеһе. Был йәмәғәт башланғысындағы эшмәкәрлекте Станислав Сарыгин тормошҡа ашырасаҡ. Йүнәлеш бик ҡыҙыҡлы һәм кәрәкле, муниципалитетта граждандар йәмғиәте менән эште яңы кимәлгә алып сығырлыҡ кешеләр булыуы зарур. Хакимиәттә ошо йүнәлештә идаралыҡ та эшләй. Яңы вазифа - сираттағы аҙым булды. Станислав Александровичтың кем икәнен әйтеп торорға кәрәкмәйҙер, тап уның туранан-тура ҡатнашлығында, уның профессионаллеге, ойоштороу, кәрәкле хеҙмәттәр менән һөйләшә белеүе һөҙөмтәһендә Өфөлә йыл дауамында тиҫтәләрсә эре спорт саралары, шул иҫәптән "1000 велосипедсы көнө" үтә.

Сираттағы етди иғтибар талап иткән тема - ул да булһа, сираттағы йылытыу миҙгеленә әҙерлек. Был тармаҡта яйланған система эшләй. Әлеге ваҡытҡа торлаҡ фондының дөйөм күләменең 52 проценты яңы миҙгелгә әҙер. Бынан тыш, социаль объекттарҙа ла әҙерлек эштәре алып барыла. Профилактика учреждениелары - 75, балалар баҡсалары - 99, өҫтәмә белем биреү учреждениелары - 83, спорт учреждениелары - 70, мәктәптәр - 92, урта профессиональ белем биреү йорттары һәм вуздар 70,5 процентҡа әҙер. Ә инде дөйөм эштәр сентябрь урталарына тамамланырға тейеш. БашРТС-ҡа иһә Ибраһимов бульварында инженер-техник, төҙөлөш-монтаж эштәрен быйыл тамамлау бурысы ҡуйылды, сөнки киләһе йыл планына был урамды реконструкциялау индерелгән.

Мәғлүм булыуынса, Өфө халыҡ-ара саралар үткәреү майҙансығы статусына эйә. Сентябрҙә баш ҡала был статусты тағы ла бер тапҡыр раҫлаясаҡ: 20-21 сентябрҙә бында Рәсәйҙең һәм БДБ илдәренең эре ҡалаларының халыҡ-ара ассамблеяһының (МАГ) 26-сы сессияһы үтәсәк. Ул ойошманың 20 йыллығына арнала һәм "Хәүефһеҙ ҡала. Комплекслы ҡараш" форумы менән билдәләнә. Форум эшендә МАГ-тың барлыҡ ағза-ҡалалары, БМО Советының Хабитат, БДБ-ның башҡарма комитеты, РФ Федерация Советы, РФ Дәүләт Думаһының профиль комитеттары, фәнни эксперт ойошмаларының ҡала-ара берләшмәләре вәкилдәре килеүе көтөлә. Форум барлыҡ ҡалалар өсөн дә бик әһәмиәтле. Сөнки унда ҡатнашыусылар ҡала мөхитендә хәүефһеҙ йәшәүгә йүнәлтелгән муниципаль тәжрибәләр менән бушлай алмаша. Өфө 4-се йыл рәттән Волга буйы федераль округының комплекслы хәүефһеҙлек мәсьәләләре буйынса иң хәүефһеҙ ҡалаһы тип таныла. Ошо өлкәләге эшмәкәрлек БМО-ның Хабитат ойошмаһын да ҡыҙыҡһындыра һәм улар былтыр ҙа форумда ҡатнашһа, быйыл да килергә теләк белдерә.

Шулай ҙа кәңәшмәнең төп темаларының береһе булып "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" проекты сиктәрендә башҡарылған эштәрҙе ҡарау торҙо. Программаның үтәлеше менән ҡала хакимиәтенең Төҙөлөш, юлдарҙы һәм яһалма ҡоролмаларҙы ремонтлау буйынса идаралыҡ начальнигы Радмил Мөслимов таныштырҙы. Дөйөм алғанда, барлығы 88,96 километр юл ремонтланырға, 43 мең квадрат метрға юл билдәләре эшләнергә тейеш. Подрядсыларҙы конкурс ярҙамында һайлау һөҙөмтәһендә экономияланған финанстар иҫәбенә тағы ла 6,6 километр өҫтәмә юл ремонтлау мөмкинлеге барлыҡҡа килгән. Әле эштәрҙе 10 подряд ойошмаһы башҡара, план 51,87 процентҡа үтәлгән.

Юл билдәләренә килгәндә, әле улар тулыһынса "Өфө-Аэропорт" юлында эшләнгән, Салауат Юлаев һәм Октябрь проспекттарында айырым участкаларҙа башҡарылған. "Термопластик билдәләр ҡаланың үҙәк - автомобилдәр күп йөрөгән урам юлдарына һалына. Был материал ныҡлы, тиҙ ашалып бармай, температура үҙгәреүенә, химик матдәләр йоғонтоһона сыҙам, - тип белдерҙе сығыш яһаусы. - Составындағы "быяла шарҙар" төнөн яҡтыртып, водителдәргә әллә ҡайҙан күренеп тора. Әммә билдә һалынғандан һуң материал тулыһынса кипһен өсөн ярты сәғәт ваҡыт кәрәк. Тик водителдәрҙең барыһы ла ҡала хеҙмәттәренең эшен ихтирам итеп бармай, бәғзеләр шунда уҡ билдә өҫтөнән үтеп, уның нормативта билдәләнгән хеҙмәт мөҙҙәтен ҡыҫҡарта".

Был - бөгөн көнүҙәк проблемаларҙың береһе генә. Сөнки былтыр беренсе тапҡыр юлдарҙы яңы технология буйынса һала башланылар һәм уларҙың ҡулланыу ваҡыты оҙайырға тейеш ине. Ошо арауыҡта юл һалыу сифатында һынылыш барлыҡҡа килгәнме, юҡмы икән? Һандар күрһәтеүенсә, былтыр бракка сығарылған юлдар 6,5 - 10 процент тәшкил итһә, быйыл ул 4,5 процент. Был мәсьәләне яҡтыртыуҙа шулай уҡ киң мәғлүмәт сараларынан да объективлыҡ талап ителә. Әгәр яңы ғына һалынған асфальт ҡатламы ҡырып алына икән, тимәк, юл ГОСТ талаптарына тап килмәй һәм юл лабораторияһы участканы ҡабул итмәгән, подрядсы уны үҙ иҫәбенә ҡабаттан сифатлы итеп башҡарырға тейеш. Шулай уҡ үҙәк урамдарҙа ғына түгел, башҡа юлдарҙа ла билдәләр термопластиктан һалыныуы ла муниципалитет өсөн ҙур күрһәткес, сөнки хатта сит илдәрҙә лә термопластик бары тик айырым категория юлдарҙа ғына файҙаланыла. Әгәр юл ремонтлауҙа бөгөн алынған темптар киләсәктә лә яйланмаһа, 2025 йылда баш ҡалала тулыһынса уңайлы юл мөхите булдырыласаҡ

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Ф. Х. Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһында - яңы директор. Ул - Зөлфиә Ғәлийәнова. 2010 йылдан алып әлеге көнгә тиклем Зөлфиә Ғәлийәнова Белоретта Я. Хамматов исемендәге башҡорт гимназияһы директоры булып эшләне. Хеҙмәт эшмәкәрлеген баш ҡаланың 39-сы гимназияһында башҡорт теле уҡытыусыһы булып башлай, Белорет ҡалаһының халыҡ мәғарифы идаралығында методист йөгөн тарта.

✓Өфөләге Боҙ һарайында "Салауат Юлаев" хоккей клубы кубогы өсөн йәштәр хоккей командалары араһында турнир старт алды. Алтынсы миҙгел алды ярышында алты команда: "Толпар" (Өфө), "Авто" (Екатеринбург), "Аҡ Айыуҙар" (Силәбе), "Югра мамонттары" (Ханты-Манси), "Реактор" (Түбәнге Кама) һәм "Спутник" (Әлмәт) ҡатнаша.

✓Өфө ҡалаһының 4-се йоғошло клиник дауаханаһы хеҙмәткәрҙәре Fibroscan күсмә аппаратында бауырҙың фиброз дәрәжәһен билдәләү буйынса бушлай акция уҙғарҙы. Барлығы фиброэластометрия үткәреүгә мохтаж 288 пациент тикшерелде. 125 пациентта бауыр фиброзының көсәйә барыуы асыҡланған, 36-һында - аныҡ фиброз стадияһында (бауыр циррозы). Артабан тикшереү үтергә ҡушылған.

✓Өфөлә 31 августа тиклем йөк машиналары хәрәкәтенә ваҡытлыса сикләү индерелгән. Төбәк Хөкүмәтенең бойороғона ярашлы, тыйыу дөйөм ҡулланылыштағы автомобиль юлдарының асфальт ҡатламын һаҡлау өсөн билдәләнгән. Баш ҡалаға ингән һәм сыҡҡан урындарҙа тейешле тыйыусы билдәләр ҡуйылған. Сикләү осоронда йөк машиналары төнгө сәғәт 10-дан иртәнге сәғәт 10-ға тиклем хәрәкәт итә ала. Рәсәйҙә һауа температураһы 32 градустан юғары булғанда федераль трасса буйынса йөк машиналары хәрәкәтен тыйыу 5 июлдән индерелгән. Был ҡағиҙә ҙур пассажир автобустарына таралмай.

✓Роспотребнадзор Өфөләге 11 һыу яҡтылығында һыу сифатын тикшергән. Йылы күлендә эсәктә йәшәүсе йоғошло организмдар цисталары һәм йәшәүгә һәләтле бабаҫыр (острица) йомортҡалары табылған. Максимов күлендә - термотолерант колиформ бактериялары, ул һыуҙың кеше тиҙәге менән бысраныуы тураһында һөйләй. Башҡа күлдәрҙә артыҡ күләмдә химик матдәләр табылған. Тикшеренеү тураһында тулыраҡ отчетты ойошманың сайтында уҡырға мөмкин.

✔ *Иерусалимда Өфөнө 2019 йылда Йәйге Халыҡ-ара балалар уйындарының баш ҡалаһы булараҡ таныштырыу сараһы үтте. Төрлө илдәрҙең рәсми делегацияларына әҙерлек барышы, спорт объекттарының әҙерлеге хаҡында һөйләнеләр.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН

# КЕМ АЛЫҠ?



**Өфөлә эксперт советы республикалағы дәүләт телдәрен һәм Башҡортостан халыҡтары телдәрен һаҡлауға һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән Башҡортостан Башлығы гранттарын алыуға ғаризаларҙы ҡарай.**

Конкурсҡа бөтәһе 325 ғариза килгән. Әйтәйек, мәҙәниәт өлкәһендә 79 ғариза, мәғариф өлкәһендә - 130, спорт һәм йәштәр сәйәсәте өлкәһендә - 14, киң мәғлүмәт саралары өлкәһендә - 64, фән өлкәһендә - 38. Ҡатнашыусылар эшмәкәрлектең төп принциптары һәм комиссияның бурыстары тураһында Эксперт советы рәйесе Рафаил Шафиҡовты тыңланы һәм тапшырылған материалдарҙы ҡарай башланы. Эксперттар конкурс ғаризаларының грант биреү тәртибенә тап килеүенә баһа бирергә тейеш. Артабан ғаризаларҙы конкурс комиссияһы ҡарай. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, бынан алда республика Башлығы Рөстәм Хәмитов ошондай проекттарға булышлыҡ итеү тураһында тейешле указ сығарғайны. Уның ҡушыуы буйынса Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы дәүләт ярҙамы сараларын биреү тәртибен әҙерләне. Грантҡа мәҙәниәт, мәғариф, фән, киң мәғлүмәт саралары, йәштәр сәйәсәте һәм спорт өлкәһендә Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрен һәм төбәктәге халыҡтарҙың телдәрен, шулай уҡ республиканан ситтә башҡорт телен һаҡлап ҡалыу һәм үҫтереү йәһәтенән эшмәкәрлек алып барған дәүләт һәм муниципаль унитар предприятиелары, коммерцияға ҡарамаған ойошмалар дәғүә итә ала.

# БЕРЕНСЕ КЛАСҠА...



**Яҡынса мәғүмәттәр буйынса, Башҡортостанда яңы 2018-2019 уҡыу йылында 50 меңдән ашыу беренсе класс уҡыусыһы мәктәпкә бара, ун беренселәр 19 меңдән күберәк. Республика Мәғариф министрлығында ошондай фараз бирәләр.**

Былтыр төбәктә 52 мең уҡыусы тәү тапҡыр мәктәп тупһаһына аяҡ баҫты. Беренсе класҡа 6,5 йәштәге балалар ҡабул ителә, ләкин һигеҙ йәштән дә һуң түгел. Яңы уҡыу йылы алдынан бөтә ерҙә лә "Мәктәп йәрминкәләре" ойошторолған. Унда мәктәп кәрәк-яраҡтарын етештереүселәр, китап магазиндары, ҙур сауҙа предприятиелары һәм шәхси эшҡыуарҙар ҡатнаша. Ата-әсәләр өсөн август - ҙур сығымдар айы. Улар әйтеүенсә, мәктәпкә әҙерләнеү яҡынса 10 мең һумға төшә. Ләкин ауыр тормош хәлендә ҡалған балаларға һәм ғаиләләргә мәктәпкә йыйынырға Башҡортостандың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы ойоштороған хәйриә акцияһы ярҙам итә. Халыҡтан һәм предприятиеларҙан мәктәп кәрәк-яраҡтарын "Ғаилә" районара үҙәктәрҙә, шулай уҡ уларҙың республика ҡала-районлдарындағы бүлексәләрендә йыялар. Канцелярия тауарҙары, яҙыу, һүрәт төшөрөү кәрәк-яраҡтары, дәфтәрҙәр, балалар ижады өсөн йыйылмалар яңы килеш ҡабул ителә. Портфелдәр, мәктәп формаһы, дәреслектәр, нәфис әҙәбиәт яңы йәки тотонолған булһа ла ярай. Йыйылған канцелярия тауарҙары һәм мәктәп кәрәк-яраҡтары август аҙағында һаулыҡ мөмкинлектәре сикле, аҙ тәьмин ителгән күп балалы йәки тулы булмаған ғаиләләрҙәге, атаәсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларға тапшырыла. Был ғаиләләр һәм балалар Башҡортостандың Ғаилә, хеҙмәт һәм социаль яҡлау министрлығы ҡарамағындағы халыҡты социаль яҡлау учреждениеларында иҫәптә тора.

# ЕҢЕП ҠАЙТАЛАР



**Иерусалимда (Израиль) үткән Халыҡ-ара Балалар уйындарында баш ҡаланан 13 спортсы спорттың өс төрөндә: еңел атлетика, дзюдо һәм фехтование - ҡатнаша.**

Беренсе көндә өфөләр 3 көмөш, 1 бронза миҙал яуланы. Дзюдола Александр Павлов менән Наил Гәрәев - көмөш, Арсентий Воеводин бронза миҙалға лайыҡ булһа, фехтованиенан Эмилия Фәйзиева икенсе урын алды. Ә еңел атлет Аделина Хөсәйенова 400 метрлыҡ дистанцияла әлегә финалға сыҡты. Артабан Иерусалимда Өфөнө 2019 йылда Йәйге Халыҡ-ара балалар уйындарының баш ҡалаһы булараҡ таныштырыу сараһы үтте. Төрлө илдәрҙең рәсми делегацияларына әҙерлек барышы, спорт объекттарының һәм йәшәү урындарының әҙерлеге, трансферҙар һәм тукланыуҙы ойоштороу хаҡында һөйләнеләр. Делегация вәкилдәре виза режимының һәм спортсыларҙың ҡалаға килеүе нисек тәьмин ителәсәге менән ҡыҙыҡһынды. Уйындарҙыябыу тантанаһы барышында Өфө спортсылары Израилдән Халыҡара балалар уйындары флагын ҡабул итергә тейеш.

# НУҒАЙҘА...



**Өфө янындағы Нуғай ауылында 147-се мәктәп бинаһын төҙөп бөтөп киләләр. Былтыр төҙәлештең беренсе сираты - 300 урынлыҡ корпус һәм бөтә административ һәм инженер бүлмәләр файҙаланыуға тапшырылды.**

Быйыл 1 сентябргә 950 уҡыусыға иҫәпләнгән төп корпус файҙаланыуға тапшырыласаҡ. Халыҡ тығыҙ ултырған Нуғайҙағы мәктәп ҡаланың Октябрь районында уҡыу урындарына ҡытлыҡты бөтөрөргә тейеш, тип күҙаллайҙар Өфө ҡала округы хакимиәтендә. Бынан тыш, баш ҡалала яңы уҡыу йылына яңыртыу эштәренән һуң 1-се мәктәп асылырға тейеш. 44-се, 115-се мәктәптәрҙә реконструкцияләу дауам итә. Дим районының Сағыу биҫтәһендә һәм Инорстың яңы кварталдарында яңы мәктәптәр төҙөү өсөн майҙансыҡтар әҙерләнә. Ҡала власы был төҙәлештәр алдағы бер нисә йылға етерлек мәктәптәр һанын тәьмин итергә мөмкинлек бирер тип иҫәп тота.

ҠЫҪҠАСА

# МАШИНАЛЫ БУЛҒЫҢ КИЛҺӘ...

✔ **Йыл йомғаҡтары буйынса уныш йыйыуҙа иң юғары һөҙөмтәләргә өлгәшкән республика ауыл хужалығы хеҙмәткәрҙәре бүләкләнә.** Республика Башлығы иң шәп механизаторҙарҙы, комбайнсыларҙы дәртләндереү өсөн ун "Шевроле" автомобиле һатып алыуға 8 миллион самаһы аҡса бүлеү тураһындағы тейешле документҡа ҡул ҡуйған. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, аграрийҙар араһында конкурс 2016 йылдан уҙғарыла. Йыл һайын ун иң яҡшы ауыл хужалығы хеҙмәткәрҙәре - иген йыйыу комбайндары, үҙйөрөшлө сапҡыс операторҙары, йөк автомобилдәре водителдәре, сөгөлдөр йыйыу комбайндарын йөрөтөүселәр, механизаторҙар һәм башҡалар - төбәк етәксеһенән автомобилдәр менән бүләкләнә.

✔ **2 августан 2017 йылда эшләгән Башҡортостан пенсионерҙары пенсияны арттырылған күләмдә ала башлай.** Рәсәй Пенсия фондының республика буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәтендә билдәләүҙәренсә, эшләүсе пенсионерҙарҙың страховка пенсиялары күләмдәрен йыл һайын августа ҡайтанан иҫәпләү буйынса бөтә эштәр ваҡытында башҡарылған. Пенсиялар ғаризаһыҙ, автоматик рәүештә ҡайтанан иҫәпләнә. Августағы өҫтәмә аҡса күләме һәр кемдең айырым. Ул эш осоронан һәм эш биреүсенең Пенсия фондына күсергән страховка иғәнәләре суммаһынан тора. Яңы пенсия күләмен республикалағы 243 мең пенсионер аласаҡ. Түләүгә сығымдарҙы финанслау тулы күләмдә тәьмин ителгән. Раҫланған графикка ярашлы, пенсияларҙы почта элемтәһе бүлексәләре 2-24 августа тарата. Кредит ойошмаларына аҡса килешеү менән билдәләнгән ваҡытта күсереләсәк, тип өҫтәнеләр Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһендә.

✔ **Башҡортостанда йәйҙең һуңғы айы нормаға ярашлы була.** Был - Башгидрометүҙәк синоптиктарының 2018 йылдың августына яҡынса фаразы. "Уртаса һауа температураһы 18 градус самаһы булыуы көтөлә. Яуым-төшөм дә норма сиктәрендә - 40-70 миллиметр", - тип аныҡлыҡ индерҙе белгестәр. "Гисметео" порталында урынлаштырылған мәғлүмәткә ярашлы, айҙың тәүге көндәрендә Өфөлә һауа температураһы 27-30 градус тәшкил итә. Һуңынан термометр бағанаһы аҡрынлап +20-гә тиклем төшә башлай. Августа тап ошондай һауа торошо, һирәк-һаяҡ ваҡ ямғырҙар күҙаллана.

✔ **Башҡортостанда 2018 йылдың беренсе кварталында һатыуҙан 5240 килограмм ауырлыкта 755 сифатһыҙ һәм хәүефле аҙыҡ-түлек партияһы алынған.** Ул күбенсә емеш-еләк - 1153 килограмм, ит һәм ит ризыҡтары - 797 килограмм, ҡош ите, йомортҡа һәм уларҙан эшләнгән аҙыҡ-түлек - 786 килограмм, алкоголле эсемлектәр (һыра) - 617 килограмм, һөт һәм һөт ризыҡтары - 798 килограмм, икмәк-ҡалас изделиелары - 251 килограмм, кондитер изделиелары - 181 килограмм. Был мәғлүмәтте Роспотребнадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығы етәксеһе урынбаҫары Александр Жеребцов ведомство коллегияһында белдерҙе. Тикшереү һөҙөмтәләре буйынса ҡулланыу ваҡыты үтеү, һаҡлау шарттарын боҙоу, марка ярлыҡтары, оҙатыу документтары булмау сәбәпле 61,7 декалитр күләмдә 125 партия алкоголь продукцияһын һатыу тыйылған. Алкоголь продукцияһын һатҡанда ҡануниәтте боҙған өсөн 1 951 500 һумға 199 административ штраф һалынған.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Һалҡын тейгәндә...

❖ Селлә башланды, тымау тейә һалып бара. Тымауҙан һаҡланыу өсөн нашатыр спиртын еҫкәргә кәрәк.

❖ Бала-сағаға тымау тейһә, 1 балғалаҡ йәшел сәйҙе 1 стакан ҡайнар һыуҙа бешереп, 15-20 минут томалап торорға, тән йылыһына тиклем һыуытырға һәм шуның менән баланың танауын йыуҙырырға. Төнгөлөккә йылы төнәтмәне танау тишектәренә 3-4 тамсы тамыҙырға. Йәшел сәй танау ҡыуышлығын таҙарта, лайлалы тиресәһен ярһытмай.

❖ Киҙеү булмаһа, ярты стакан һыуға 4-5 тамсы йод ҡушып эсеү ҙә ярҙам итә.

❖ Кәстрүлгә йыуылған һоло һалып, һөттә өҫтөнә сыҡҡансы ҡояһың һәм шуны ҡыҙыу булмаған утта һоло бешкәнсе тотаһың. Һөтө кәмеһә, өҫтәп тораһың. Барлыҡҡа килгән шыйыҡсаны йүкергән сақта көнөнә 3 тапҡыр 2-3 ҡалаҡ ашайһың.

❖ Көслө тымау ваҡытында картуф быуында ултырыу ҙа файҙа бирә. Йоҡлар алдынан 2-3 картуфты әрсеп, кәстрүлдә бешерергә, һыуын түкмәйенсә, баштан-аяҡ ҡапланып, быуҙы һуларға кәрәк. Был дауа боронҙан килә, үлән төнәтмәһен һулау ҙа бар халыҡта.

### Йәрәхәттәр

❖ Тирене киҫеп йә бәреп йәрәхәтләнгәндә, шешек сыҡҡанда 1 ҡалаҡ кәзә йәки һарыҡтың эс майы, ярты ҡалаҡ тоҙ алаһың һәм шуға ваҡ ҡына туралған башлы һуған һалып болғатаһың, һуғанды иҙгеләйһең. Барлыҡҡа килгән майҙы йәрәхәткә лә (яраға ла), уның тирә-яғына ла һөртәһең. Төнгөлөккә йәрәхәтле урынға марляға һөртөп ябаһың.

### Бөйөр таҙартыу

❖ Бөйөрҙө таҙартыу өсөн 1 балғалаҡ киндер орлоғон 1 стакан һыуҙа ҡайнаталар, шул һыуҙы 2 көн буйы 2 сәғәт һайын яртышар стакан эсәләр. Һуғыш йылдарында халыҡ киндер орлоғон күп ашаны, шуға ла бөйөр сире булмаған. Һыу эсеүгә ауыр булһа, лимон һуты ҡушырға.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Чернушки эргәһендәге алышты күреүсе тағы бер шаһит табылды. Ул - Саратов өлкәһенең Балаково ҡалаһынан Огурцов тигән иптәш ине.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# БӘЙҒӘМБӘРҘӘР

## Муса бәйғәмбәр

Ҡөрьәндә: "Мысыр ерендә ҡылған ғәҙелһеҙлеге менән дан алған мәкерле Фирғәүен, халҡының бер аҙын үҙенә яҡынайтып, ҡалғанын ҡолға әүерелдерә. Шула итеп, ул халҡын икегә бүлә. Исраилдарҙың үҙҙәренә азатлыҡ яулар бала тыуыуын көтөүҙәрен ишетеп, уларҙың ир балаларын рәхимһеҙ ҡырҙыра, ир-ат енесенән булған берәүҙе лә тере ҡалдырмаҫ өсөн бөтөн вәхшилекте эшләй. Сөнки ундай бала тыуһа, уның ҡеүәтле хакимлығы юҡҡа сығасаҡ. Аллаһы Тәғәлә, Фирғәүен түбәнһетеп, ҡолға әйләндергән кешеләрҙе изгелеккә әйләүселәр, ерҙең һәм властың вариҫтары итеп, уларға оло мәрхәмәт күрһәтә", - тиелә. Был Муса бәйғәмбәр донъяға килгәндәге замандағы ваҡиғаларҙы сағылдыра. Фирғәүендең ҡуштандары Мысыр буйлап исраилдарҙың ир балаларын үлтергән саҡта, Алланың ҡушыуы менән Муса тере ҡала һәм шуныһы ғәжәп, ул тап Фирғәүендең йортонда тәрбиәләнеп буй еткерә. Муса тыуғас, әсәһе сабыйҙы үлтереүҙәренән ҡурҡып, кәрзингә төрөп һала ла, Нил йылғаһына төшөрөп ағыҙа. Кәрзин ағым буйлап бара торғас, Фирғәүендең һарайы янында уны күреп ҡалып, ярға сығаралар. Фирғәүендең ҡатыны сабыйҙы күреү менән уны бик ярата һәм иренән уны үлтермәүен үтенә. Алланың ҡушыуы менән сабый үҙ әсәһе һарайға килгәнсе, сит ҡатынды иммәй. Ә әсәһенең килеүе шулай була: асығыуҙан сабый ярһып илағас, былар ҡайғыға төшә һәм шунда Фирғәүендең һеңлеһе һарайҙан алыҫ түгел бер өйҙә баланы ҡарап үҫтерерҙәй ғаилә булыуын әйтә һәм шулай итеп, Мусаның әсәһе һарайға килә.

Быларҙың барыһы ла Бөйөк Алланың ихтыяры буйынса эшләнә. Улар уның баланың үҙ әсәһе булыуын белмәй. Аллаһы Тәғәлә ҡатынға был тәрән серен һаҡларға көс бирә. Муса үҙ әсәһен имеп ҙурая, көс туплай. Фирғәүендең һарайында булған бөтөн өҫтөнлөктәр менән файҙалана. Аллаһы Тәғәлә уға зиһен, аҡыл, ғилем бүләк итә. Муса бер аҙҙан Мысырҙы ҡалдырып, бер ҡалаға килә. Моғайын, ул был ҡалаға төндә йәки бөтөн кеше эштән төшкөлөккә туҡтаған мәлдә ингәндер. Ул исраилдарҙың бер вариҫын ҡотҡарыу маҡсатында, үлтерергә уйламаһа ла, аңғармаҫтан бер мысырлыға үлтергәнсе һуға. Ул бик ныҡ ҡайғыра һәм Алланан үҙенең оло гонаһын кисереүен һорап, доға уҡый. Һуңынан Муса аңлы рәүештә үҙен Аллаға арнарға һәм яманлыҡ ҡылыусыларға файҙа булырҙай бер нәмә лә эшләмәҫкә тантаналы рәүештә һүҙ бирә.

## Мусаның Фирғәүендән китеүе

Муса Мысырҙан сығып, Шөғәйеп бәйғәмбәрҙең рәхимһеҙ ҡырылған, иҫән ҡалғандары ағасҡа табынған халҡы йәшәгән Мадйанға юл ала.

Эҫелә арманһыҙ булып, сүллектә ял итергә туҡтай. Мысырҙа булған ваҡиға арҡаһында күңеле яманһыулап, хәсрәтле уйҙарға сумып ултырғанда, малдарын йылғаға һыулауға төшөргән көтөүселәрҙе һәм уларҙан ситтәрәк баҫып торған ике ҡыҙҙы күрә. Оялсан ҡыҙҙар, аталары ҡарт булыу сәбәпле, мал һуғарырға үҙҙәре килеүен һәм ир-аттан алда шишмәгә үтергә базнат итмәүҙәрен әйткәс, ярҙамсыл Муса уларҙың көтөүен һуғарып бирә. Ҡыҙҙар рәхмәт әйтеп, ҡайтып киткәс, Муса Алланан ярҙам һорап, доға ҡылыр һәм ял итеп алыр өсөн күләгәле ергә килә. Бер аҙҙан ҡыҙҙарҙың береһе уның янына килеп, атаһы өйҙәренә саҡырыуын әйтә. Муса уларҙың өйөнә килә һәм ҡартҡа Мысырҙан китеүен, бәләгә тарыуын һөйләй. Тегеһе: "Борсолма, һин оятһыҙ, намыҫһыҙ халыҡтан ҡотолғанһың. Беҙҙең өҫтән Фирғәүен бер нисек тә хакимлыҡ итә алмаясаҡ", - тип йыуата. Ҡыҙҙары: "Атай, уны көтөүсе итеп ялла. Һин унан да көслө һәм тоғро кеше таба алмаясаҡһың", - ти. Ҡарт Мусаға бер ҡыҙын кәләш итеп бирергә теләүен, ҡалым урынына 8-10 йыл буш эшләргә тейешлеген әйтә. Муса ризалаша.

**(Дауамы бар).**

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ



# БЫЛ ҠЫЙЫУЛЫҠ...

## ҡаһарманлыҡ өлгөһө булып йәшәй

**Ошо көндәрҙә Александр Матросовҡа Советтар Союзы Геройы исеме бирелеүгә 75 йыл тулды. Хәҙер инде беҙ уның Шәкирйән Юныс улы Мөхәмәтйәнов икәнен яҡшы беләбеҙ. Танылған журналист Рәүеф Насиров 1989-1998 йылдар эсендә уның өҙөк-йыртыҡ ҡына биографияһын тулыраҡ яҙыу теләге менән эҙәрмәнлек эшенә тотонғайны һәм төрлө тарафтарҙан үҙенең фараздарын тулыландырған, раҫлаған йөҙәрләгән-йөҙәрләгән хаттар алғайны. Уларҙың күбеһе "Башҡортостан" гәзитендә баҫылды, шулай уҡ "Откуда ты родом, Матросов?" (1994 йылда баҫылды), "А. Матросов: "Поиск Истины" (2007 й.) тигән китаптарына индерелде. Үҙе тере сағында Рәүеф Хәй улы шул хаттарҙың Матросовтың амбразураны ҡаплауы ваҡиғаһы яҙылған икәүһенә аңлатма биргән мәҡәләһен беҙҙең редакцияға алып килгәйне һәм ул 2008 йылда "Киске Өфө"лә баҫылып та сыҡҡайны. "Ҡабатлағандан доға иҫкермәй" тип, ул хаттарҙы тағы ла уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итергә булдыҡ.**

"Ҡыҙыл Армия көнөн ҡаршылап, беҙҙең полк һөжүм башларға йыйынды. Унан алдараҡ походҡа сыҡтыҡ. Төнөн барабыҙ, көндөҙ ял итәбеҙ. Атлайһы ара яҡын түгел бит: башта - Великие Луки, ә унан - Ловать йылғаһы. Алғы һыҙыҡҡа тиклем әле күпме бараһы. Бына шунда булды ла инде тәүге осрашыу немецтар менән.

Беҙҙең ҡоралдар - 120 миллиметрлы ауыр пушкалар. Һуғыш тоҡанып китте. Ата башланыҡ. Ләкин пушкаларыбыҙ бата бит. Ултырған урыныбыҙ һаҙлыҡ. Ориентирҙы юғалтабыҙ. Кофт аша саҡ барып сыҡтыҡ ҡарағай урманына. Тап бына беҙҙең артиллерия алырға тейеш ине ул участканы. Ләкин ала алманы. Ахырҙа, дошмандың ут нөктәһен юҡ итеү бурысын пехотаға ҡуштылар - А. Матросов хеҙмәт иткән автоматсылар взводына.

Матросовҡа хәтлем унда бер нисә егетебеҙ башын һалғайны инде. Бына шунда А. Матросов: "Мин барайым", - тине. Беҙ ҙә шунда инек. Уның менән йәнәш үк түгел инде, ләкин шунда. Хәҙер бына әйтәләр: ул, йәнәһе, тәүҙә автоматынан атҡан, ә һуңынан граната ташлаған, тип. Ләкин бит быны берәү ҙә күрмәгән, йәнәшендә бер кем дә булмаған. Ул нисек барып еткән, нисек дзотҡа ташланған - уны ла күрмәгәндәр. Ул бит секунд эсендә эшләнә торған эш".

Хаталана Мисбах ағай. Күреүселәр булған. Башта беҙ Мисбах ағай менән хаттар алыштыҡ, аҙаҡ өс тапҡыр осрашып, һөйләшеп ултырҙыҡ. Мисбах ағай, башҡа бик күптәр кеүек үк, беҙ һөжүмде 23 февралдә башланыҡ, тине. А. Матросов та шул көндө һәләк булды, тимәксе. Ләкин һуңғы осрашыу ваҡытында ул, оҙаҡ уйланып ултырғандан һуң, былай тине: "23 февралдә һөжүмгә күсеү тураһында приказ биргәндәрҙер, моғайын, ә унан һуң бит йылғаны аша сығырға, Чернушкиға яҡын килергә һәм шунан һуң ғына ата башларға кәрәк ине. Чернушки эргәһендә һуғыш ҡыҙғансы, туҡтағансы, моғайын, 27 февраль дә булып киткәндер". Әлбиттә, шулай! (Был ваҡыт аҙаҡ икенсе рәсми документтар менән дә дөрөҫләнгән).

Чернушки эргәһендәге алышты күреүсе тағы бер шаһит табылды. Ул - Саратов өлкәһенең Балаково ҡалаһынан Огурцов тигән иптәш ине. Бер нисә хат алышҡас, һуғыш ветераны, ә аҙаҡ күп орден-миҙалдар менән наградланған хеҙмәт ветераны Петр Александрович А. Матросов тураһында бына нимәләр яҙҙы: "Беҙҙең Сталин исемендәге 91-се Тымыҡ океан комсомол диңгеҙ бригадаһы Калинин фронтында боевой һынау үтте. Ҡамауға эләкте. Уны йырып сыҡҡас, беҙгә өҫтәмә көс килде. 1942 йыл декабренең беренсе яртыһында ине был. Өҫтәмә көстө Дятлово станцияһында ҡаршыланыҡ. А. Матросов та ошо төркөмдә ине.

Мин үҙем разведчик, уны ла разведка төркөмөнә алырға ине, ләкин был уй бойомға ашманы, сөнки Сашка үтә лә ябыҡ, хәлһеҙ ине, буйы ла ҙур түгел. Шунлыҡтан, ул бер аҙ комендант взводында, кухня тирәһендә йөрөнө, тиҙҙән уны бер капитан үҙенә ординарец итеп алды.

Беҙҙең бригадаға Чернушкины алыу бурысы ҡуйылды. Беҙ, разведчиктар, хәрби заданиенан ҡайтып киләбеҙ. Үҙебеҙҙең оборонаның алғы һыҙығына яҡынлашҡайныҡ - ә "телде" Чернушки ауылында алғайныҡ, - беҙҙең һалдаттарҙың "ура!" тауыштарын ишеттек. Ләкин немецтар элеккесә атыуҙарын дауам итә. Эш нимәлә икән? Мин белешергә булдым. Ә разведчиктарым атакаға әҙерләнде. Үҙем атыш барған яҡҡа шыуыштым. Ишетәм: таныш тауыш.

- Егеттәр, нимә, немец баш күтәрергә лә бирмәйме?

- Мине ҡаплап тороғоҙ әле, - ти Саша. - Мин яҡыныраҡ барайым да граната ташлайым.

- Сашка, ул бит хәҙер киҫеп һала, - тием.

Шулай ҙа беҙ амбразураны алырға булдыҡ. Ҡараңғы, бер ни күренмәй. Ишетәм: пулемет татылдауҙан туҡтаны. Беҙ яҡыныраҡ шыуыштыҡ. Немецтарҙың икенсе пулеметы ут сәсә, снарядтар шартлай. Бына ошо мәлдә миңә снаряд ярсығы килеп тейҙе. Сашканан ун-ун биш метр ситтәрәк инем. Саша амбразураға ташланды. Пулемет тынып ҡалды. Ә егеттәр, аяҡ өҫтө күтәрелеп, алға ынтылдылар. Мине һөйрәп сығарҙылар ҙа, яраларҙы бәйләп, Мәскәүгә госпиталгә оҙаттылар".

Бына шулай амбразура эргәһендә булған ваҡиғалар. Мин, тағы ла нимәләрҙер белергә теләп һәм төрлө һорауҙар ҡуйып, Петр Александровичҡа бер-бер артлы хаттар ебәрҙем. Уның яуаптарының береһе былай ине: "Комсомолецтар һәм командование А. Матросовҡа Советтар Союзы Геройы исемен биреү тураһында И. Сталинға яҙғандар".

Ошо 91-се диңгеҙ бригадаһы етәкселегенең юллауы буйынсамы, әллә Калинин фронты командующийы маршал А. И. Еременконың сәйәси донесениеһы буйынсамы, быныһы асыҡ ҡына түгел, Верховный Башкомандующий И. В. Сталин А. М. Матросовҡа - Учалы егете Шәкирйән Мөхәмәтйәновҡа иң юғары исем бирергә бойороҡ еткерә.

**Рәүеф НАСИРОВ.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

4

# Ғаиләм-ҡәлғәм

4-10 август (урағай)
2018 йыл
№31 (813)

ӘЙТӘГҮР!

# БОРОЛОРҒА БОЙОРОҠТО...

## баш бит үҙе бирә

**"Ир - баш, ҡатын - муйын", тигән мәҡәл бар. Был мәҡәлдең мәғәнәһен нисек аңлайһығыҙ, ғөмүмән, бөгөнгө ғаиләлә кем - баш, кем - муйын?**

***Зөфәр ИСМӘҒИЛЕВ, уҡытыусы:*** Баш, йәки етәксе ролен бөгөн ҡатын-ҡыҙҙар күберәк дәғүә итә. Йәмғиәте ниндәй, ғаиләһе лә шундай - һис аптырарлыҡ юҡ. Ә инде күңел торошона ҡарап билдәләгәндә, бында тулы азатлыҡ һәм тигеҙлек булырға тейеш. Ни өсөн тигәндә, күңел кимәлендә ғаилә төшөнсәһе беренсе урында түгел. Ошо турала бер кинәйәле хикәйә быға асыҡ миҫал. Бер-берен үлеп яратҡан егет менән ҡыҙ күлдең ҡапма-ҡаршы яғындағы һарайҙа йәшәгән. Улар көн һайын күл ситендәге билдәле бер урында осрашҡан. Көндәрҙән бер көндө егет ҡыҙға өйләнеү тураһында тәҡдим яһаған. "Мин һиңә кейәүгә сығырға ризамын, - тигән принцесса. - Тик өйләнешкәндән һуң да һәр беребеҙ үҙ һарайында йәшәһен". Егет, әлбиттә, быға риза булмаған, ул тиҙерәк һөйгәненең үҙ һарайына алып ҡайтырға теләгән. "Улайһа, һин мине яратмайһың, әгәр ҙә яратһаң, минең азатлығыма дәғүә итмәҫ инең",- тигән ҡыҙ. Тимәк, ғаилә - ул бәләкәй генә яңы йәмғиәт төҙөү өсөн үҙ-үҙеңде, иң тәү нәүбәттә, азатлығыңды ҡорбан итеү. Ана шул ике ҡорбандың береһе - баш, икенсеһе - муйын. Ә ҡорбан өсөн баш булдың ни ҙә, муйын булдың ни - барыбер түгелме? Ҡолдар йөк тартып өйрәнгән инде ул. Бары ғаилә йөгөн дә бер йүнәлештә тартһындар, шуныһы мөһимдер, минеңсә.

***Хөрмәт ИБРАҺИМОВ, инженер-төҙөүсе:*** Бер шағир әйтмешләй:

***"Ир - баш, ҡатын - муйын.
Мәҡәл дөрөҫ булһа ла,
Боролорға бойороҡто
Муйын бит баштан ала".***

Йәғни, икенсе төрлө әйткәндә, кешегә өндәшһәң, мәғлүмәтте бит муйын түгел, башта торған ҡолаҡ ҡабул итә һәм мейегә тапшыра. Шунан мейе баш аша муйынға бойороҡ бирә. Тимәк, баш булмайынса, муйын үҙенән-үҙе борола алмай. "Ир - баш, ҡатын - муйын", тигән мәҡәл көнкүреш кимәлендә генә, төптән уйламайынса әйтелгән. "Ирҙең дәрәжәһен һаҡлап, уны күтәреп йөрөтөүсе муйын", тип, уны икенсе төрлө лә аңлатып була түгелме? Тимәк, ҡатын-ҡыҙ иренең йәмғиәттә лә, ғаиләлә лә аҡыл яғынан да, физик күрһәткестәре буйынса ла лайыҡлы ир-зат икәнен белдереүсе, ҡурсалап, күтәреп йөрөтөүсе "муйын" булырға тейеш. Ул башты алып йөрөүсе генә түгел, ә, ниндәйҙер кимәлдә, үҙенең ҡатын-ҡыҙ вазифаһы менән ирҙең баш булыуын тәьмин итергә, һис юғы, булышлыҡ итергә бурыслы. Ғәжәп кеүек тойолһа ла, беҙ һәр секунд һайын ҡатын-ҡыҙ затын иҫебеҙгә төшөрөргә мәжбүрбеҙ. Мәҫәлән, һәр беребеҙҙең әсәһе ғүмер буйы күңеленән сыҡмай. Әсәлек ҡиммәте лә ошо муйын төшөнсәһенә һалынған, ул бит "башты" донъяға килтергән һәм ирҙе күтәреп йөрөтөүсе һымаҡ күҙаллана. Хәләл ефеткә килгәндә, үҙебеҙҙе тулы ҡанлы тойоп, үҙебеҙҙе һынау өсөн дә ҡатын-ҡыҙ кәрәк. Был йәһәттән, ҡатын-ҡыҙ иренә баһа биреүсе шкаланың теленә оҡшаш. Ул иренең гәйрәтлеген, аҡыл һәләтен күрһәтә. Тимәк, ир - баш, ҡатын - муйын, тигән мәҡәл дөрөҫ, әммә ләкин бөгөнгө ысынбарлыҡта уға тарайтылған мәғәнә һалалар. Йәнәһе, муйын ҡайҙа теләй, шунда бора. Улай түгел: боролорға бойороҡто муйын бит баштан ала...

***Самат ЮЛГИЛДИН, эшҡыуар:*** Ғаиләлә һәр саҡ ир - баш, ҡатын муйын була. Шуға ир төрлө юлдар менән аҡса таба, йәшәргә урын йүнләй, ҡатын ғаиләне эстән һаҡлай - балаларын, өйөн ҡарай. Әммә бөгөн илдең иҡтисади хәле насарайыу сәбәпле, ирҙәр йүнләп аҡса ла эшләй, йәшәргә урын да таба алмай. Ҡайҙан тапһын - 80-се йылдарҙан бирле йәштәр һатып алырлыҡ фатирҙар ҙа, ятаҡтар ҙа төҙөлмәй. Шул сәбәпле ирҙәр бөгөн баш була алмай. Уларҙың нервылар системаһы оҙайлы көсөргәнешкә, йылдар буйы аҡсаһыҙ, фатирһыҙ йәшәүгә түҙә алмай һына, һәм улар эсә башлай. Ә ҡатын-ҡыҙ түҙемле. Шулай булмаһа, ул туғыҙ ай буйы ауырлы йөрөй алыр инеме? Ҡартәсәйем һөйләй торғайны: һуғыш ваҡытында ул бар булған ризыҡты малайҙарға биргән, шулай итеп, уларҙы һаҡлап алып ҡалған. Ҡыҙҙарына һыу ғына эсергән, ә улар барыбер ирешмәгән.

Шулай итеп, илдең хәле ирҙәрҙе юҡҡа сығара, баш булырға, ғаиләнең яҡларға, һаҡларға мөмкинлек бирмәй.

**Хөснитдин ШӘЙХИН яҙып алды.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# КҮБЕРӘК ПОСОБИЕ КЕМГӘ?

✓ **Башҡортостанда йәшәүселәрҙең 3500-ҙән ашыуы балалар пособиеһының яңы төрөн ала, тип хәбәр иттеләр 2018 йылдың тәүге ярты йыллығына йомғаҡтар буйынса Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы коллегияһы ултырышында.** Атап әйткәндә, беренсе бала тыуыу (ул йәки ҡыҙ итеп алыу) менән бәйле айлыҡ түләүҙе ошо осор эсендә республикалағы 2 мең самаһы ғаилә юллаған. Түләүҙәрҙең дөйөм суммаһы 63 миллион һум тәшкил иткән. Бындай айлыҡ түләүҙең күләме 8892 һум тәшкил итә. Башҡортостанда 1,6 меңдән ашыу ғаилә 2018 йылда аҙ тәьмин ителгән ишле ғаиләлә өсөнсө йәки артабанғы булып тыуған баланың өс йәшенә тиклем айлыҡ аҡсалата түләү ала. Уларҙың һәр ҡайһыһына айына 8 993-шәр һум ҡаралған. Ошо яңы пособие төрө буйынса дөйөм түләүҙәр күләме республикала тәүге ярты йылда 68 миллион һум тәшкил иткән.

✓ **Башҡортостанда өлкән йәштәгеләрҙе һәм инвалидтарҙы тәрбиәгә алған ғаиләләр һанын 124-кә тиклем арттырыу күҙаллана, тип хәбәр итте төбәктең ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры урынбаҫары Ольга Кабанова.** "Бөгөнгә республикала ошондай 80 ғаилә булдырылған, уларҙа 84 кеше йәшәй. Йыл аҙағына тиклем оло йәштәге граждандарҙы һәм инвалидтарҙы тәрбиәгә алған ғаиләләр һанын 124-кә еткереү ҡаралған", - тип билдәләне Ольга Кабанова ағымдағы йылдың тәүге алты айы йомғаҡтары буйынса министрлыҡ коллегияһы ултырышында. Уның һүҙҙәренсә, ошо ваҡыт эсендә республиканың халыҡты социаль хеҙмәтләндереү үҙәге тәрбиәгә алған 61 ғаиләне тикшергән. Был ғаиләләрҙә 65 оло йәштәге кеше һәм инвалид йәшәй. "Тикшереүҙәр һөҙөмтәһендә төҙөлгән килешеү шарттарын боҙоу осраҡтары асыҡланмаған", - тип өҫтәне ул.

✓ **Башҡортостанда 800-гә яҡын ғаилә "Торлаҡ-төҙөлөш һаҡламы" программаһы ярҙамында үҙҙәренең йәшәү шарттарын яҡшыртҡан.** Башҡортостандың ипотека-туплау механизмдарын һәм программаларын үҫтереү дирекцияһы етәксеһе Евгений Декатов инвестиция банк продукттары буйынса Рәсәй банктары ассоциацияһы комитеты ултырышында ошо хаҡта һөйләне. Уның һүҙҙәренсә, төбәктә программа 2014 йылдан тормошҡа ашырыла. "Әлеге ваҡытта 800-гә яҡын ғаилә үҙҙәренең йәшәү шарттарын яҡшыртҡан да инде, банктар аҡса йыйыуҙы тамамлаған тағы 300 самаһы гражданға йылына 7 процент менән ипотека кредитын алыуға ризалыҡ биргән", - тип билдәләне республика вәкиле. Торлаҡ-төҙөлөш һаҡламы системаһы сағыштырмаса ҡиммәт булмаған ресурстар йәлеп итеү һәм клиент өсөн конкуренция күҙлегенән банктар өсөн бик ҡулай. Программа махсус шарттар тәҡдим итергә әҙер төҙөүселәрҙе йәлеп итә, сөнки түләргә һәләтле клиенттар пулына иҫәп тота ала. Башҡортостандың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитетының матбуғат хеҙмәте мәғлүмәтенә ярашлы, Рәсәй банктары ассоциацияһы вәкилдәре билдәләүенсә, Башҡортостан тәжрибәһе бюджет өсөн аҙыраҡ сығымлы граждандарға дәүләт ярҙамы механизмын күрһәтә, һәм уны башҡа төбәктәргә туплау-торлаҡ финанслау программаһын башлау механизмын стандартлаштырғанда файҙаланырға кәрәк.

✓ **Рәсәй Президенты Владимир Путин төбәк властарына капиталь ремонт өсөн иғәнәләр ҡапланған льготалыларҙың исемлеген киңәйтергә мөмкинлек биргән законға ҡул ҡуйҙы.** Документ 30 июлдә рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылып сыҡты. Законға ярашлы, хәҙер 70 йәшкә еткән пенсионерҙарға, беренсе һәм икенсе төркөм инвалид булған ғаиләләргә капиталь ремонтҡа сығымдар компенсацияланә. 70-80 йәштәге пенсионерҙар өсөн компенсация - 50 процент, 80-дән олораҡтар өсөн 100 процент тәшкил итәсәк.

АФАРИН!

# БАРЫҺЫ ЛА ЕҢЕҮСЕ

**Күптән түгел Көйөргәҙе районында "Ғаилә - туған тел һаҡсыһы" тип исемләнгән бик күркәм сара үтте. Көйөргәҙе районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты менән районыбыҙҙың "Ағинәй" йәмғиәт ойошмаһы берлектә ойошторған сарала барлығы һигеҙ ғаилә ҡатнашты.**

Рухлы сарала Кинйәбай ауылынан Ниғмәтовтар ғаиләһе ҡатнашты. Уларҙың бәләкәй генә ҡыҙҙарының сәскә кеүек өйрәлеп-өйрәлеп бейеүенә барыһы ла һоҡланды. Яманһарынан килгән Йосоповтар ғаиләһе ҡәйнә менән килен дуҫлығын сәй эсеү йолаһы аша сағылдырҙы. Түкәндән Мырҙағоловтар башҡаларҙан иң ҙур ғаилә булараҡ айырылып торҙо. Таймаҫ ауылынан Хөсәйеновтар ғаиләһе: "Беҙҙең ғаиләгә "папа", "мама" тигән һүҙҙәр бөтөнләй ят. Биш улыбыҙ ҙа тик "атай" һәм "әсәй" тип кенә өндәшә", - тип сығыш яһап һоҡландырҙы. Ҡансыра ауылынан күп балалы Уразбаевтар ғаиләһе лә һыр бирмәне. Ғаилә башлығы моңло итеп йыр йырлағанда, уның эргәһендә ҡатыны һәм балалары бергәләп генә бейеп торҙо. Яҡуттан килгән Заһитовтарҙың музыкаль ғаиләһе менән танышыу ҙа күңелгә ятты. Илкәнәйҙән Мөхәмәтшиндарҙың ҡыҙҙары һәм малайҙары "Урал батыр" эпосын тасуири итеп яттан һөйләп таң ҡалдырҙы. Ә инде Ҡотлоюлдан килгән Ибраһимовтарҙың ҡыҙҙары бик оҫта итеп бейеп, олаталары моңло итеп йырлап, өләсәләре тасуири шиғыр уҡып һәр кемдең күңелен елкетте.

Шулай итеп, һәр ғаилә үҙен талантлы ла, оҫта ҡуллы ла, эшкә лә талымһыҙ, егәрле итеп күрһәтте. Бороңғо йолаларҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе онотмау маҡсатында үткәрелгән сарала "Бишек йыры" яңғырауы тағы ла бер мәртәбә ине. Балаларҙы тап ошо йырҙы йырлап үҫтерергә кәрәклеккә ишара яһалды. Ғаиләләргә хас булған мәҡәлдәр, әйтемдәр ҙә ситтә ҡалманы. Һәр ғаиләгә баһаланып әйтелде улар. Баһалама комиссияһы ағзаларына - район мәҙәниәт бүлеге начальнигы Әлфиә Вәхитоваға, "Ағинәй" йәмғиәт ойошмаһы рәйесе урынбаҫары Минзиә Ҡотлоәхмәтоваға, районыбыҙ ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе Юлай Ишмөхәмәтовҡа, "Юшатыр" гәзитенең баш мөхәррире Малик Ильясовҡа, район депутаты Ләйсән Аҙнабаеваға ниндәйҙер ғаиләне айырып билдәләү ауыр булды, әлбиттә. Шуға ла беренһен дә айырып ҡарамаҫҡа, барыһын да еңеүселәр тип иғлан итергә килештеләр. Һәр ғаиләгә иҫтәлеккә бүләктәр тапшырылды.

**Айгөл ХАЛИҠОВА.**
**Көйөргәҙе районы.**

✓ *Әлегә бер гонаһы ла булмаған бына шундай сабый балалар "фитрат хәлендә", тип һанала. Беҙҙең яҡтарҙа әйтмешләй, "эсендәге бар нәмә - тышта" була инде бәләкәс кешенең.*



**Әсәйем мәрхүмә һөйләгән бер лаҡап хәтеремдә ҡалған. Ниндәйҙер мәжлестә бер сабый ата-әсәһенең үҙ-ара һөйләшкән серен бөтә ҡунаҡтар алдында асып биргән икән. Бер талай көлөшөп алғандан һуң, әлеге баланы әсәһе шелтәләй башлағас, ҡунаҡтарҙың береһе, хәлде йомшартыу ниәте менәндер инде: "Балалы өйҙә ғәйбәт юҡ, тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр шул", - тигән һығымта яһап ҡуйған. Ошо уҡ йыйында, әллә нисә йыл бергә йәшәп тә, балаға өлгәшә алмаған ирле-ҡатынлы бер ғаилә лә ултырған булған. "Балалы өй..." тигәнде ишеткәс тә, үҙҙәренә "төрттөрөп" әйтелгән, тип юраған әлеге ғаилә башлығы: "Әйҙә, ҡуй, бисәкәй, ҡайтайыҡ. Балаларыбыҙ булмағас, быларса, беҙ тик ғәйбәт кенә һөйләшеп йәшәйбеҙ икән!.." - тип, йыйындағыларға үпкәләп, ҡатынының ай-вайына ҡуймай, мәжлестән айырып алып ҡайтып киткән, имеш...**

# БАЛАЛЫ ӨЙҘӘ ҒӘЙБӘТ ЮҠ...

## йәки Бәләкәс кеше мәҙәктәре

Ғәҙәттә, балаларҙың һөйләшкәнен мәҙәк тип кенә ҡабул итәһең, әлбиттә. Әммә бер аҙ тәрәнерәк фекерләй башлаһаң, бәғзе ваҡыт байтаҡ ғүмер иткән оло кеше лә фәһем алырлыҡ уларҙан. Ололарҙан айырмалы, һәр сабый бала, ысынлап та, саф күңелле, эскерһеҙ, мәкер-фәләнде, йәшерен-батырындарҙы, һәр төрлө "шылдыр-малауҙар"ҙы ла белмәй. Әлегә бер гонаһы ла булмаған бына шундай сабый балалар "фитрат хәлендә", тип һанала. Беҙҙең яҡтарҙа әйтмешләй, "эсендәге бар нәмә - тышта" була инде бәләкәс кешенең. Ҡатмарлы тормош юлында хисапһыҙ һикәлтә, ҡытыршылыҡтар аша үтеп, оло кеше һәр төрлө яҡшы эштәр менән бер рәттән, әллә күпме хата яһай, гонаһтар ҡыла ғүмере эсендә. Балиғ булған кешенең изге эштәре, шулай уҡ гонаһтары - барыһы ла уның ғәмәл дәфтәренә яҙылып бара. Ә инде шундай уҡ "боҙоҡлоҡ" яһаған сабый бала өсөн был эш һис кенә лә гонаһ түгел. Баланың оло кешеләрҙән ишетеп һөйләгән хәбәре лә ғәйбәткә һаналмай...

...Кесе улымдың ҡыҙы Әлисәнең бәләкәй сағындағы бернисә мәҙәген бәйән итмәксемен. Хәйер, ундай көлкөлө хәлдәр һәр ғаиләлә лә була торғандыр. Бер мәл ҡатыным етенсе йәш менән барған Әлисәне эйәртеп, аҙыҡ-түлек магазинына инә. Рәүилә апаһына (минең ҡәйенбикәгә) ҡунаҡҡа барыр алдынан уға бер аҙ күстәнәс алыу була ниәте. Ейәнсәрҙе етәкләп, магазин кәштәләрендәге бихисап тәм-томдо ҡарай-ҡарай, үҙалл һөйләнеп, дөрөҫөрәге, "тауышланып уйлап" йөрөй икән ҡатыным. "...Эй, бынау кәнфиттәргә яҡын да барырлыҡ түгел бит, килоһы дүрт йөҙ ҙә, биш йөҙ... Алма, апельсин, сәй, печенье һымаҡ нәмәләр генә алмаһам..." Шул көндө әлеге ҡәйенбикәләргә килеп, күстәнәсләп, һөйләшә-һөйләшә сәй эсеп ултырабыҙ. Әлисә лә беҙҙең менән. Бер аҙҙан: "Рәүилә инәй, беҙ бөгөн ҡәртәсәйем менән һиңә күстәнәс алырға тип магазинға барғайныҡ. Иң тәүҙә шоколад кәнфиттәре алайыҡ тип уйлаһаҡ - уларҙың ни, янына хатта яҡын барырлыҡ түгел, килограмы дүрт йөҙ ҙә, биш йөҙ..." - тип ихлас күңелдән һалдырмаһынмы Әлисәбеҙ!.. Күмәкләшеп, эсебеҙ ҡатҡансы көлдөк. Ни өсөн көлгәнебеҙҙе ҡапылда аңлап етмәгән сабый ҡыҙыбыҙ ҙа беҙҙең менән бергә көлөшкән булды. Ни әйтһәң инде шундай керһеҙ күңелле балаға?..

...Унан алдараҡ булған бәғзе ҡыҙыҡтары ла иҫтә ҡалған. Кескәй Әлисәне (уға дүрт-биш йәштәр тирәһе булғандыр) бер көн табипҡа алып барҙыҡ. Бала ниндәйҙер сәбәптән эсе ҡаталау (урыҫса әйткәндә - запор) менән яфалана ине. Һәр төрлө дарыуҙар менән бер рәттән, педиатр балаға ҡара слива (чернослив) ашарға ла кәңәш итте. Өйгә ҡайтҡас: "Бына ошоно ашаһаң, оло ярауың йомшаҡ була", - тип, әлеге алған дарыу-фәләндәрҙең, шул иҫәптән, ҡара емештең дә тәнгә тәьҫиренең "механизмын" үҙебеҙсә, башҡортсалап, тырыша-тырыша балаға аңлатабыҙ. Күпмелер ваҡыттан беҙгә ағай-энеләребеҙ ҡунаҡҡа килде. Өҫтәлдәге һый-мәҙәр араһында



Беҙҙән бер ниҙе лә йәшереп булмай...

әлеге ҡара емеш тә бар. Ейәнсәребеҙ һәр ваҡыт ян:ыбыҙҙа ғына йөрөй бит инде. Бер аҙ ашап ултыра биргәс, Әлисәбеҙ ҡунаҡтарға ҡарап: "Чернослив ашап ултырығыҙ, шуны ашаһағыҙ, оло ярауығыҙ йомшаҡ була...", - тип, хатта унан да ябайыраҡ башҡорт теле менән әйтеп һалды!.. Мәжлесте йәнләндереп ебәрҙе шул ейәнсәребеҙ. Шул уҡ мәжлестә ҡолаҡҡа ҡатыраҡ булған ике-өс кеше бар ине. Насар ишеткән был оло кешеләрҙең ҡабат-ҡабат һорашыуын да шәйләп алған ҡыҙыбыҙ: "Олатайҙарҙың барыһының да икешәр ҡолағы бар. Шулай булһа ла, нишләп улар ишетмәй ул?" - тип тағы көлдөрөп алды.

...Алты йәш менән барған Әлисә 9 май көндө ҡәртәсәһе менән Еңеү парадын телевизорҙан ҡарап ултыра икән. Ҡәртәсәһе кинәт кенә илап ебәргән. Күптән түгел вафат булып ҡалған фронтовик атаһы (минең ҡайным) иҫенә төшкән икән. Әлисә ҡәртәсәһенең сәстәренән һыйпай-һыйпай, уны йыуатырға тотонған: "Нишләп илайһың, ҡәртәсәй, илама. Ирең бар, өйөң бар, балаларың бар..." Кескенә ҡыҙҙың был һүҙҙәренән ҡәртәсәһе күҙ йәше аша көлөп ебәргән...

...Әле мәктәпкә бармаған көйөнсә хәрефтәрҙе танып, уларҙы ҡушып уҡырға өйрәнеп килгән ейәнсәребеҙ һәр төрлө китаптар ҡарарға ярата ине. Бер көндө элеккерәк бер китапта "СССР" һүҙен күреп ҡалған да, аптырап ултыра: "Нишләп китапта былдай теләһә нәмә яҙғандар ул?.."

...Бер мәл өйгә шатланып килеп инде. Ишеткән инер-инмәҫтән үҙенең хәбәрен әйтә һалды: "Картатай, мин бөгөн китапханаға яҙылдым. Минән уның өсөн взятка алманылар!" Взятка?.." Ҡапылда төшөнә алмай тора биргәс, ирекһеҙҙән, ҡыҫҡырып көлөп ебәрҙем. Даими китап уҡыусылар башта "вступительный взнос" өсөн егермешәр һум аҡса түләйҙәр икән унда. "Взнос"ҡа оҡшағараҡ был һүҙҙе ҡайҙандыр ишеткән булғандыр инде. "Эйе, ҡартатай, - тип дауам итә ейәнсәрем, - "картатайың китапханаһының иң әүҙем уҡыусыһы булғанға күрә, һинән аҡса алмайбыҙ", тип әйтте унда эшләгән апай!.."

...Элегерәк, йәш саҡта, үҙебеҙҙең уларыбыҙҙың да шундай-бындай ҡыҙыҡтары булғыланы, әлбиттә, тик әллә ни хәтерҙә ҡалмаған. Әммә өлкән улым Салауаттың ҡасандыр миңә биргән ифрат та ҡатмарлы бер һорауы әле булһа иҫемдә. Малай кеше, башлыса, һәр төрлө "үҙенә кәрәк" мәғлүмәтте урамда башҡа малайҙарҙан алыусан була. Ә бына был һорауҙы ни өсөн атаһына, йәғни, миңә биреүҙе хуп күргәндер - белмәйем. Һорауҙың да ниндәйе! Ҡапылда оло кеше ҡаушап ҡалырлыҡ. Алты йәштәр самаһы ине уға.

- Баланы әсәй кеше тыуҙыра икәнен беләм, - тип башланы малай, - шуның өсөн дә ул әсәһенә оҡшай... Ә бит балалар әсәһенә генә түгел, атаһына ла оҡшайҙар!.. Ни өсөн шулай? - Хәрби ҡаласыҡта балалар баҡсаһына йөрөгән малай, урыҫсалап, тағы өҫтәп тә ҡуя. - При чем тут атаһы?..

Мин, ул саҡта әле йәш атай кеше, ысынлап та ҡаушап төштөм.

- Кешеләр бер ғаиләлә, бер төрлө аҙыҡтар ашап, бер шарттарҙа оҙаҡ йәшәһә, ваҡыт үтеү менән бер-береһенә үҙенән-үҙе оҡшай башлай... - тип ялғанларға тура килде. Әммә балаларға ялғанлау ҙа килешмәгән нәмә тиҙәр. Хатта ошо көнгәсә былдай һорауға яуап бирергә ҡыйыныһынам, дөрөҫөрәге, бала кешегә ошондай мәсьәләне нисегерәк итеп аңлатып бирергә кәрәклеген белмәйем.

...Баландың балаһы балдан татлы, тигәндәй, һәр кемдең иғтибары үҙ балаларына ҡарағанда ейән-ейәнсәрҙәренә күберәк бүленәләр инде. Шуғалырмы, был бәләкәстәрҙең ҡыҙыҡтарын, онотмаҫ өсөн, хатта яҙып барырға тырышам. Әлеге Әлисә ейәнсәремдең шундай-бындай һорауҙарына, әлбиттә, башлыса ҡәртәсәһе яуап бирә. Хәләл ефетемә бер көн был ҡыҙ ҙа "ауыр" ғына бер һорау биргән:

- Ҡәртәсәй, бала әсә кешенең ҡорһағында үҫкәнен беләм, - ти икән бер көн был зирәк ҡыҙ, - әммә унан тышҡа нисек сыға һуң?

- Больницала "кесар киҫеүе" ярҙамында операция яһап алалар, - тип яуаплаған ҡәртәсәһе үҙе медик кеше булараҡ. Ҡыҙ ошо яуап менән ҡәнәғәт тә булып ҡалған, буғай. Әммә бер көндө был ҡыҙый уйын ваҡытында аллея буйындағы ҡыуаҡ төбөндә "ҡорһаҡлы" бесәй ятҡанын шәйләп ҡалған икән. Берике сәғәттән әлеге бесәйҙең янында яңы ғына тыуған дүрт балаһын да күргән. Өйгә ҡайтҡас, ҡәртәсәһенә күргәндәрен бәйнә-бәйнә һөйләп биргән һәм... әлеге "кесар"ҙы иҫләй икән:

- Ҡәртәсәй, ә бесәйҙең ҡорһағын бер кем дә "кесар"ламаған бит. Шулай ҙа... балалары ҡайһылайтып сыҡты икән?..

Бала тыуыу "механизм"ын бер аҙ ғына булһа ла ысынбарлыҡҡа яҡынлаштырып, аңлатып бирергә мәжбүр булған ҡәртәсәһе был ныҡышмал ҡыҙға...

...Саф башҡортса һөйләшеп үҫеп килгән был баланың атаһы ла (Азат улым) хәрби ҡаласыҡта тыуып үҫте. Башҡорт телен өйрәтһәк тә, сит өлкәләге мәктәптә, урамда үҙ телендә һөйләшеп йөрөү мөмкинлеге ифрат та сикләнгән ине бит инде. Шуға күрә, улыбыҙ башҡортса бер аҙ ҡыйынлыҡ менән һөйләшә ине. Быны тойоп йөрөгән Әлисә бер көндө ҡәртәсәһенә:

- Ҡәртәсәй, нишләп атайым үҙе ҡара булһа ла - урыҫ ул? - тип ҡыҙыҡһына икән.

- Атайың урыҫ түгел, тик башҡорттар бөтөнләй булмаған яҡта тыуып үҫте ул. Әле шулай һөйләшеп йөрөгәс тә бик шәп әле. Үҙең атайың менән йышыраҡ туған телеңдә һөйләш, уны өйрәт, - тип әйтеүҙән башҡа һүҙ тапмаған ҡәртәсәһе. Әйтергә кәрәк, ҡыҙҙары менән фәҡәт үҙ телендә генә аралашып йөрөгән Азат улым хәҙер башҡортса иркен һәм ифрат таҙа һөйләшә.

...Мәкәләмдең төп геройы булған был бала быйыл өсөнсө синыфты тамамланы. Хәҙер инде тормошҡа ярайһы етди ҡарай башлаған һиҙелә. Йыш ҡына дин хаҡында йәиһә донъяуи тормош буйынса һорауҙар биргеләүен дауам итә. Бына шулай, көңгөр-ҡаңғыр итеп, сабыйҙарыбыҙҙың һәр хәрәкәтенә, һәр һүҙенә шатланып (ә бәғзе мәлдә, етди уйланып!), ғүмер итеп ятҡан көн. Башҡа ейән-ейәнсәрҙәремдең дә ҡыҙыҡтарын хәтеремдә йыя барам. Бүтән авторҙар ҙа үҙҙәренең шундай мәкәләләре менән бүлешһә, иғтибар менән уҡырмын, иншаллаһ.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ

# ИР БУРЫСЫ НИНДӘЙ,

## ҡыҙ-ҡатындыҡы ниндәй?

**Рубрикаға килгән хат был юлы бик ҡыҫҡа яҙылған. Гәзит уҡыусыбыҙ үҙ һөнәрен, йәшен, ҡайҙа йәшәүен әйтмәйенсә, бары бер генә һорау биргән: "Психологик матриархаттың сәбәптәре нимәлә, енестәр араһында психологик тигеҙлеккә килеп буламы?"**

Дәүләт ғаилә башлығын власть таянысы итеп күрә, сөнки ғаиләләге мөнәсәбәттәр йәмғиәттәге мөнәсәбәттәрҙең бәләкәй генә, миниатюр сағылышы. Йәмғиәт ағзалары ил башлығына буйһонған кеүек, ғаилә ағзалары, ғәҙәттә, атайға буйһона. Бер яҡтан, атай кешегә ғаилә эсендәге монархтың бурыстары йөкмәтелһә, икенсе яҡтан, идара итеү ҙә уға ҡайтарып ҡалдырыла. Тәртип һәм хаҡлыҡ кеүек Аллаһы Тәғәләгә хас сифаттар ҙа атай кешегә "йәбештерелә". Ғаилә башлығының төп бурысы - ғаиләнең матди яҡтан етеш йәшәүен ҡайғыртыу, тәрбиә менән шөғөлләнеү, ғаилә ағзаларының рухи үҫешенә йоғонто яһау. Ҡатын өйҙәң бөхтәлеге өсөн борсола, ҡул эштәре менән булыша, ҡыҙҙар тәрбиәләй. Улдарын тәрбиәләү - атайҙың бурысы. Өй мөшәкәттәрен ир менән ҡатын икеүҙән-икеү генә хәл итә. XX быуат башына тиклем ғаиләнең ошондай патриархаль моделе һаҡланып килә. Яңы социаль үҙгәрештәр иҡтисадта, етештереү өлкәһендә генә күҙәләнеш тапмай, улар ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәттәрҙе лә ҡырҡа үҙгәртә. Шул осорҙағы ғаиләләге кризистар ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәттәрҙе эстән шартлата. Ҡатын-ҡыҙҙың һөйөргә хоҡуғы барлығы тураһында иғлан иткән Анна Каренинаны иҫкә төшөрөгөҙ. Яңы заман ҡатын-ҡыҙын сағылдырған был әҙәби образ патриархаль ғаиләгә һыймаған заман ҡатынының символына әүерелә. Ваҡыт үтә килә, Рәсәйҙәге социаль үҙгәрештәр патриархаль ғаиләнең дә нигеҙҙәрен ҡаҡшата, ирҙәрҙең абруйы айлап юҡҡа сыға бара. Ирҙәрҙең абруйы ҡала ерендә нулен-се шкалаға тиклем төшһә, ауыл ерендә лә кәмей башлай.

Социологтар бөгөнгө ғаилә башлығының ролен ғаилә эсендәге мөнәсәбәттәрҙә йәйғә һалыусы, тәртиптә тотоусы, көйләүсе, ойоштороусы булараҡ күҙаллай. Бөгөн был функцияларҙы кем үтәй һуң? Мәҫәлән, бөгөнгө ғаиләнең финанс министры ролен күп осраҡта ҡатын-ҡыҙ башҡара. Килем-сығымдарҙы ла ул ойоштора. Ғаиләләге төп тәрбиәсе-педагог та - ҡатын-ҡыҙ. Тимәк, патриархаль ғаилә моделендәге ғаилә башлығы функциялары элекке талаптарға бөтөнләй яуап бирмәй. Ғәҙәттәге заман ғаиләһе мәжүсилек осорондағы ғаиләнең тап киреһе - бөгөн ир кеше ғаилә өсөн тулыһынса яуап бирмәй. Өйҙән ситтә эшләүсе әсәйҙәр барлыҡҡа килеүе ир менән ҡатын араһындағы элекке мөнәсәбәттәрҙе бөтөнләйе менән юҡҡа сығарҙы. Мәҫәлән, элекке ғаиләләрҙә ир менән ҡатын ғаилә өсөн берҙәй яуап бирһә, бурыстарҙы тигеҙ бүлешһә, бөгөнгө ирҙәргә ғаилә бурыстарының аҙ генә өлөшө төшә. Ҡайһы бер ғаиләләрҙә ирҙәр ғаилә тормошонан бөтөнләйе менән ситләшә. Бер ир әйтмешләй: "Минең ғаиләлә ике генә бурысым бар: ваҡытында ҡайтырға һәм ҡатыным әҙерләгән бер ниндәй аштан да баш тартмаҫҡа". Ҡатын-ҡыҙҙың ғаиләләге эшен иһә "тауыҡ сүпләһә лә, бөтөрлөк түгел". Бурыстарҙың тигеҙ бүленмәүе, әлбиттә, һис шикһеҙ, ғаурға сығара. Был Рәсәй ғаиләләре өсөн хас күренеш.

Көнбайыш илдәрендәге ғаилә үҫеше ике юл буйынса бара:

а) феминистик юл (ҡатын-ҡыҙ үҙ азатлығы һәм бурыстары өсөн көрәшә);

б) өй хужалығын "индустриализациялау" юлы (көнкүреш техникаһын ҡулланыу, көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү комбинаттарына мөрәжәғәт итеү, ярымфабрикат аҙыҡ ҡулланыу һ.б.).

Рәсәй ғаиләләрендә лә ике төрлөлөк һиҙелә:

а) насар көнкүреш шарттарында ғаилә бурыстарын тигеҙ бүлешеү өсөн талаш;

б) "байҙарса" йәшәргә тырышыу.

Ғаиләләрҙә балалар һаны кәмеү ҙә күп үҙгәрештәргә дусар итте. Мәҫәлән, ағай-апайҙарҙың йоғонтоһо кәмеүе ғаилә эсендәге бурыстарҙы яңыса ҡарарға мәжбүр итә. Бөгөн күп ғаиләләрҙә ир кешенең бөтөнләй кәрәге юҡ. Ғаилә башлығы тигән юғары тәхетенән ҡолап төшөү атай кешене берҙә генә лә балаларына яҡынлыраҡ итмәй, киреһенсә, ул "буш урын"ға әйләнә бара.

Ҡайһы бер психологтар билдәләүенсә, бөгөнгө Рәсәй ғаиләһенең үҙгәреү мөмкинлеге бар. Әсәй кеше бөтөн бурыстарҙы үҙ өҫтөнә алған ғаилә урынына яңы типтағы ғаилә барлыҡҡа килеүе ихтимал. Уның структураһы ошолай: әсәй кеше беренсе урында, атай унан һуң, балалар икенсе лә берҙәй буйһона. Атай ғаиләне социаль яҡтан яҡлай, ә балалар эмоциональ яҡтан әсәйгә яҡын була. Был төр ғаиләләр барлыҡҡа килә башланы ла инде.

**Римма САФИНА,**
**психология фәндәре кандидаты.**

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

**Тормош ағышы шул тиклем етеҙ хәҙер. Уның артынан өлгөрөр өсөн үҙеңә лә сос, аҡыллы, ҡыҙыҡһыныусан, һәр төрлө яңылыҡты тиҙ отоп алыусан һәм уны үҙ файҙаңа ҡуллана белергә өйрәнергә кәрәк. Бөгөнгө замандың тағы бер үҙенсәлеге - барыһы ла тиерлек өҫтәмә аҡса эшләү юлдарын эҙләй. Тәү ҡарашҡа, эшҡыуарлыҡтың ҙуры ла, бәләкәйе лә күптән үҙләштерелеп бөтөп, ул өлкәгә яңы килеүселәргә килем алыу мөмкинлеге бөтөнләй юҡ кеүек. Мин был фекерҙе үҙ миҫалымда инҡар итә алам.**

# БЕР ИШТӘН КЕЙЕН

Бала саҡта һәр ҡыҙсыҡ әсәһенең матур күлдәктәрен кейеп, аяҡ кейемен эләктереп, төрлө биҙәүестәрен тағып, үҙен әкиәт ҡыҙылай хис итеп йөрөй. Ундай саҡта күлдәктең бик ҙур булыуы ла, матур туфлиҙа атлау түгел, урындан да ҡыбырлай алмай тороу ҙа, ә оҙон алҡаның яурынға ғына түгел, хатта түшкә тиклем төшөп тороуы ла, әсәй өсөн бәләкәй генә тойолған ҡатын-ҡыҙ сумкаһына көс етмәүе лә бер ни түгел. Бындай ҡупшы кейемдә үҙебеҙҙе доньялағы иң матур ҡыҙыҡай итеп тойоу күңелде нурландырыр алыштырғыһыҙ хистәр уятыр ине. Бөгөнгө балалар өсөн әсәй кеүек үк күлдәктә йөрөү хыял түгел, ә ысынбарлыҡ. Шуға күрә урамда әсәһе менән бер иштән кейенгән бәләкәс һылыуҡайҙы йәки атаһының образын бәләкәйләтеп "күсереп" алған малайҙы осратыу һирәк күренеш түгел.

Был модалы тенденцияның тағы бер тармағы - бөтә ғаилә ағзаларының да бер төрлө кейемдә фотоһүрәттәр сессияһы эшләүе. Заманса тел менән уны "Famele look" тип атайҙар. Көндән-көн популярлаша барған йүнәлештәр тегеүгә оҫта ҡыҙҙарға аҡса эшләү мөмкинлеге бирә, сөнки тотош ғаилә өсөн бер иштән тегелгән кейем тәҡдим итеүсе магазиндар юҡ кимәлендә. Әлегә тиклем һөнәрем буйынса бөтөнләй башҡа өлкәлә эшләһәм дә, тегеү-сигеүгә һәр ваҡыт ынтылдым. Хатта бәләкәй саҡта, үҙемә күлдәк тегәм, тип, әсәйемдең иң матур күлдәген ҡырҡҡыслап бөткәнемде әле булһа хәтерләйем. Ә ҡурсаҡтарға кейем тегеү өсөн "корбан" ителгән атайымдың футболка, кофталарының иҫәбе-һаны юҡ. Шуға күрә ғаиләһе менән "Famele look" стилендә фотоһүрәткә төшөүгә әҙерләнгән әхирәтем бер иш кейемдәр тапмай ыҙалаусын әйткәс, бер кистә уларға әҙерләп бирҙем. Ҡыуаныслының иге-сиге булмаған әхирәтем был эшмәкәрлегемде ағымға ҡуйырға өгөтләне һәм тәүге заказ биреүсене лә тапты. "Сарафан" радиоһы сифатлы эшләй - беренсе айҙа уҡ әллә күпме заказ йыйҙым. Ошо уҡ йүнәлештә эшләүселәр көндән-көн артһа ла, эшем ырамлы бара. "Аҡса" тип күҙем тонмайынса, тәү сиратта, сифатҡа ҙур иғтибар бүлеүем һәм клиенттың һәр бер теләген күҙ уңында тотоп тегеүем заказдарҙың күп булыуына йоғонто яһайҙыр, тип уйлайым. Хәҙер эштәремде биҙәү йәһәтенән тағы ла офоҡтар киңәйҙе. Бынан бер йыл элек кенә кейемдәрҙең бер стилдә булыуы тик уның биҙәгенә һәм теҫелеү рәүешенә ҡайтып ҡалһа, хәҙер милли орнамент һалынған күлдәк, футболка, кофталар популярлаша. Бындай төрлөлөк минең күңелемә лә яҡын, шуға күрә, һәр заказға ҙур теләк менән тотонам.

Эшләү даирәһен киңәйтеп, бөгөнгө көндә кейемгә ҡағылышлы тағы ла бер ағымды - свитшот тегеүҙе - үҙләштерҙем. Трикотаж толстовка ла, мамыҡ свитер ҙа тип әйтергә булған свитшоттар айырыуса йәштәр араһында ҙур һорау менән файҙалана. Шулай уҡ әсәйҙәр бәләкәс балаларына ла йыш тектереп ала.

"Үҙеңдең яратҡан эшеңде тап һәм һиңә башҡаса эшләргә кәрәк булмаясаҡ", тигән фекер тап минең хаҡта әйтелгән кеүек. Бөтә ихласлығымды биреп башҡарған шөғөлөм миңә килем дә килтерә, башҡаларға шатлыҡ та өләшә. Теләге булғандарҙың барыһы ла был эшкә тотона ала. Мин әйтте тиерһегеҙ, эш башлағанға бер ҙә үкенмәйәсәкһегеҙ.

**Гөлли МӘХӘМӘТЙӘНОВА.**

НӘСИХӘТТӘР

# МАЛАЙҘАРҒА

• Хөрмәтле балалар! Эшһөйәр, изгелекле, яҡшы күңелле кешеләр һәр ваҡыт хөрмәтле була һәм яҡын күренә, быны иһә үҙегеҙ ҙә беләһегеҙ. Атай-әсәйегеҙ һеҙгә ҡарата иң ауыр һәм мәшәҡәтле хеҙмәттәрҙе башҡарған һәм һаман да үтәй. Һәр ваҡыт ҡайғығыҙҙы уртаҡлашып, бәхетегеҙ өсөн тырыша, һеҙҙең өсөн Аллаһы Тәғәләгә ялбара һәм доға ҡыла. Шуның өсөн мөмкин тиклем уларҙың хеҙмәттәренә ҡаршылыҡ күрһәтмәгеҙ, мәшәҡәттәренең хаҡын ҡайтарыу мөмкин булмаһа ла, уларға ихласлыҡ менән хеҙмәт итеүсе һәм хөрмәт күрһәтеүсе булығыҙ!

• Кешенең итәғәтле (буйһоноусы) булыуы уның яҡшы күңелле булыуын күрһәтә. Һеҙгә лә иң яҡын кешеләр - атай-әсәйегеҙ. Шуның өсөн уларға һәр ваҡыт итәғәтле булығыҙ. Ғәмәл һәм һүҙҙә уларға ҡаршы килмәгеҙ. Ошо сәбәптән уларҙың күңеленә рәхәт булыр, үҙегеҙҙең күңелегеҙ һәм тормошоғоҙ ҙа гүзәл булыр.

• Атай-әсәйегеҙ алдында бик әҙәпле булығыҙ, уларҙың һүҙҙәрен яҡшы тотоғоҙ, өйрәткәндәрен аңлағыҙ, улар менән артыҡ ҡысҡырмай, әҙәпле, асыҡ һөйләшегеҙ. Улар аяҡ өҫтөндә торған ваҡытта һеҙ ҙә ултырмағыҙ!

• Йөрөгән ваҡытта атайығыҙ осраһа, уға һәм уның менән бергә булғандарға сәләм биреп, әмерҙәр көтөп торогоҙ! Әгәр ултырған ваҡытта килһә, асыҡ йөҙ менән аяҡ өҫтө торогоҙ!

• Атайығыҙ бер нәмә бирер булһа, үҙенең мәрхәмәттәре менән бирер. Шуның өсөн нимә булһа ла һораған ваҡытта, янында сит кеше булмаған ваҡытта, әҙәпле генә һорағыҙ. Әгәр теләгәнегеҙҙе бирмәһә, борсолмағыҙ. Сөнки һеҙгә нимә кәрәк һәм кәрәкмәгәнде, ниндәй әйбер ярағанды һәм ярамағанды ул яҡшыраҡ белә.

• Бала саҡта аҡса тоторға өйрәнмәгән кеше олоғайғас та аҡса тота алмай. Ғүмер түгел, көн дә үткәрә алмай. Бәлки, бар байлығын исраф итеп, бәхетһеҙ булып ҡалыр. Шуның өсөн атайығыҙ тарафынан бирелгән аҡсаларҙы тота белергә өйрәнегеҙ. Һаҡ булығыҙ. "Был аҙ ғына аҡса", тип уйламағыҙ, сөнки бөгөн һеҙгә аҙ аҡса кәрәк.

• Ҡайһы бер балалар шулай була. Атаһының малына ышанып, һис кәсеп һәм эш юлына кермәй. Ялҡаулыҡҡа ғәҙәтләнә. Ахырҙа, бер көн килер, аҡсалары ла бөтөр, йәшәр өсөн ҡулда һөнәрҙәре лә булмаҫ. Шуның өсөн, ата малына ышанып тормай, ни ҡәҙәр бай балаһы булһағыҙ ҙа, фәҡир кешенең балаһы кеүек, һөнәр өйрәнеү өсөн тырышығыҙ.

• Донъяла торған ваҡытта шатлыҡтарҙы һөйләр, ҡайғыларҙы сисер йәғни бушатыр өсөн иң яҡын бер кешегә мохтажлыҡ була. Атай-әсәйегеҙҙән башҡа бындай яҡын кеше булмаҫ. Сөнки улар баланың шатлығы һәм хәсрәттәре өсөн ҡулдан килгән бөтә саралары алдан күрергә тырыша. Шуның өсөн серҙәрегеҙҙе ата-әсәгеҙгә һөйләгеҙ, серҙәрегеҙҙең хазиналары һәр ваҡыт уларҙың күңелендә булһын!

• Ҡайһы бер бала шулай була. Атайының тәрбиәһендә, мәрхәмәттәре күләгәһендә рәхәт-рәхәт үҫә лә, үҫкәс, атаһының фекерҙәренә ҡаршы килә, һүҙҙәрен ишетмәй, уларҙың ғәмәлдәрен аҙ тип күлә (һеҙ шулай инсафһыҙ булмағыҙ). Атайығыҙ иһә һеҙҙең өсөн яуаплы булмай, бәлки улар өсөн һеҙ яуаплы булаcаҡһығыҙ. Көн артынан көн үтеү менән, ғилемдәр алға барыу сәбәпле, бөгөнгө бөйөк ғалим иртәгә шәкерт дәрәжәһендә ҡалыуы тәбиғи.

**Ризаитдин ФӘХРЕТДИНОВ.**

✓ *Ә хәҙер балаға үҙебеҙ эшләп бирәбеҙ ҙә, конкурста еңдерәбеҙ. Бәләкәй генә "эшенә" лә яңғырауыҡлы һүҙҙәрҙе матур итеп яҙып, Маҡтау ҡағыҙы тотторабыҙ, хатта район гәзитенә ҙур итеп яҙып сығарабыҙ.*



БӘХӘС ҠОРАМ

**Әсәйем тормош фәлсәфәһен тылҡый: "Инициативалы, аяғында ныҡ баҫып торған, һауанан торна тоторға маташмаған егеттәрҙе ҡара. Ирең үҙе мал табып, иңенә ятҡан яуаплылыҡты тойһа, уның ҡуйынында балдамайҙа йөҙөп йәшәрһең, үҙеңә ел-ямғыр теймәҫ. Бисә ауыҙына ҡарап, һинән көтөп ултырһа, йәшәрһең минең кеүек ир-бисә булып. Ярай әле, мин шәп, үҙе һымаҡ ҡатын эләкһә, ултырырҙар ине икәүләшеп ауыҙҙарын сөйгә элеп". Ҡаршы һүҙ әйтмәй, тыныс ҡына тыңлайым. Минең атайым, әсәйем әйткәнсә, улай уҡ йүнһеҙ түгел. Ул йомшаҡ күңелле, тыныс, игелекле, егәрле кеше. Бәлки, бындай заманда бик кәрәкле йүнселлек сифаты ғына самалыраҡтыр. Әсәйем уны бушҡа ғәйепләп, үҙ хатаһын танырға теләмәй.**

# БӘҪЕГЕҘ...

## ҡыҙ-ҡатын ҡулындамы?

Октябрь революцияһы ҡатындарҙың хоҡуҡтарын ирҙәрҙеке менән тигеҙләп, беҙҙең затҡа ирек бирҙе шул. Ә егерменсе быуат уртаһында уйлап табылған контрацептив дарыуҙар "бәйҙән ысҡындырҙы". Элек ҡатын-ҡыҙҙы ир-атҡа бала бәйләһә, хәҙер беҙ әсә булыу-булмауҙы үҙебеҙ хәл итәбеҙ. Ике енесте бәйләүсе ептәр тағы ла бушай төшә, тимәк.

Гүзәл зат аҡса табып, карьера эшләп, һаман да үҙенең ир-атҡа тиң булыуын, хатта ҡайһы бер кимәлдә өҫтөнөрәк икәнен иҫбатларға тырыша. Ғилми һәм популяр әҙәбиәттә лә енестәр һуғышы тураһында йыш яҙалар. Ҡатын-ҡыҙ ғаиләлә баш булырға, аҡсаны иренән күберәк эшләргә тырыша. Бының менән үҙенә-үҙе ауырлыҡтар тыуҙырыуын, ҡапҡан ҡороуын аңламаймы ни һуң был ҡатын-ҡыҙҙар? Ирҙәрҙән уҙҙырып, алдынан төшөп, илап, уҫаллашып, еңеп ала ла, уларҙың тәбиғи лидерлыҡ сифаттарын юҡҡа сығара. Барлыҡ ауыр мәшәҡәтте көсһөҙ иңенә һалып, йөк атылай, тормош үренә йүрмәләй. Ә тәбиғәт үҙенекен итә: бөтөнләй башҡа тәғәйенләнештә яратылған гүзәл заттың сыҙамлығы һына, инициативаһы кәмей, психологияһы ҡаҡшай. Шунда инде беҙ барлыҡ ирҙәрҙе йүнһеҙлектә ғәйепләп, ысын ир-азаматтар ҡайҙа, тип саң ҡағабыҙ.

Замана болғаныштары ла көслө затҡа ауыр йоғонто яһаны. Тарҡатылған колхоздар, эшһеҙлек, емерелгән рухи ҡиммәттәр ир-атты киләсәккә булған ышаныстан мәхрүм итте. Һөҙөмтәлә улар йә эскегә бирелде, йә оҙаҡ ваҡытҡа төшөнкөлөккә батты. Ҡатын-ҡыҙға тәбиғәттән бирелгән әсәлек инстинкты буталсыҡ осорҙа баш юғалтырға ирек бирмәне. Гүзәл заттар алыпһатарлыҡ һөнәрен үҙләштерҙе, ер аяғы ер башынан тауар ташыны, үҙ эшен асып ебәрҙе. Уларҙың әүҙемләшеүе ир-атты тағы ла тәрәнерәк депрессияға этәрҙе.

Ҡатын баш булған ғаиләлә ҡыҙ һәм ир бала ла атай-әсәһенең йәшәү рәүешен өлгө итеп ала. Ҡыҙ - әүҙемлеккә, ә көслө зат күләгәгә ынтыла.

Ҡатын ҡыҙҙың көсө һәм аҡылы - көсһөҙлөктә, наҙлылыҡта, мөхәббәттә. Бер ваҡиға тураһында һөйләйем әле. Эшләгән еремдә урта йәштәрҙәге етәксе ағай ҡатын-ҡыҙға һәр ваҡыт йылы мөғәмәлә күрһәтә: машинанан төшкәндә ҡул бирә, ауыр сумкаларҙы күтәреп ала, өҫ кейемен кейергә ярҙам итә. Уның бындай ҡыланышын аңлаһам да, үҙемә ҡағылғанда, уның егеттәрсә мөнәсәбәтен бик ауыр ҡабул итәм. Ҡул һуҙһа, күрмәмешкә һалышам, йә гардеробтан тиҙ генә кейемде алам да, ситкә тайыу яғын ҡарайым. Бер көн бергә эшләгән егеттәр менән ауыр-ауыр аппаратура ташыйбыҙ. Етәксе ағай эргәмә килде лә: "Беләһеңме, һиңә кейәүгә сығыуы бик ҡыйын буласаҡ", - тине. "Ниңә?" тип һорағанды көтмәй, яуап та бирҙе: "Ирҙәр артыҡ үҙаллы һәм көслө ҡатын-ҡыҙҙы яратмай". Уның ҡырҡыу һүҙҙәре ҡолаҡта бик оҙаҡ яңғырап торҙо. Әлеге ваҡытта мин алтын фекер әйткән ағайға тәрән рәхмәтлемен һәм уның менән тулыһынса килешәм.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Хәйләкәрлек - аҡылдың бер билдәһе бит. Ирҙәрҙең ирлеген алға һөрөп, көслө заттың киң күкрәгенә ышыҡланып, кәрәк саҡта, илһам сығанағы, йәшәү шишмәһе булып, иркәләнеп-наҙланып, рәхәт йәшәйек әле, әхирәттәр. Һеҙ шуға ризамы?**

**Тамсыгөл ДИҢГЕҘБАЕВА.**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# БАЛАЛАРЫБЫҘ ӨСӨН...

## үҙебеҙ йүгерәбеҙ, үҙебеҙ эшләйбеҙ



**Яңыраҡ телевизорҙан ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та бер ваҡиғаны күрһәттеләр. Розеткаға ҡапыл ут ҡапҡайны, бер егет һүндермәк булып, утҡа өрә башланы. Ут һүнмәгәс, йүгереп барып сепрәк (ҡулъяулыҡ булды шикелле) алып килде лә шуның менән елпетергә тотондо. Былай ҙа һүнмәгәс, алйып алйыны теге. Әлдә һыу килтереп һипмәне, токтан һуғылыр ине. Ҡаңғырҙы, ҡаушаны, аҙағы ни менән бөткәндер, күрһәтмәнеләр.**

Шул ваҡыт үҙемдең бер йылды ут менән көрәшкәнем иҫкә килеп төштө. "Жигули"ем менән район үҙәгенә тип юлға сыҡҡайным, Сәңгелдене төшөп барғанда капот аҫтынан төтөн ялбырлауын аңғарып ҡалдым да, йәһәт кенә машинамды туҡтатып, төшә һалып, капотымды асып ебәрҙем. Һауа етмәй торған икән, машинам дөрләп яна башланы. Ҡаушап ҡалманым, яратып ҡына кейгән курткамды сисеп, ут бөрккән урынға йомарлап тыҡтым да, ҡышҡы ҡарлы мәл ине, услап-услап ҡар алып, двигателем өҫтөн тултырып ташланым, юл ситендәге ҡатҡан ҡарҙы тырнай торғас, бармағым һыҙырылып ҡанай башлауына ла иғтибар итмәгәнмен. Эргәмдән бер машина жыйлап үтеп китте, туҡтап торманы, янып ятыуымдан ҡурҡҡандыр инде йәш кеше, бер-бер хәл булһа, шаһит булып йөрөү эш түгел, тигәндер. Утты томалап бөтөүемә эргәмә Ҡунафин Ринат ҡусты менән Иҫҡужин Салауат ағай килеп туҡтанылар. Хәлемде һөйләгәс, "Нисек ҡурҡманың, Мөнир ағай, машинаң шартлаһа?" тине Ринат ғәжәпләнеп. Тәүге генә машинам ҡәҙерле, "шартлаһа бергә шартлайым инде" тинем. Дөрөҫөрәге, үҙемде уйларға ваҡыт булманы бит инде ул саҡта.

Быларҙы мин ни өсөн яҙам? Беҙ, беҙҙең осор балалары, йәшәйештәге һәр киҫкен осраҡҡа ла әҙерлекле, ҡатынҡы булып үҫтек. Беҙҙе өйҙә лә, мәктәптә лә тормошҡа ныҡлы әҙерләнеләр. Тәүәккәл, ҡыйыу һәм көслө итеп. Атайым, һуғыш яугиры, 53 кенә йәшендә, миңә 15 тә тулмағайны әле, үлеп китте. Ә бит иҫ белгәндән алып ул беҙҙе бер ҡасан да эшһеҙ тотманы. Кәбир ҡустым менән икебеҙҙе урманға тыранса ярырға ла алып китер ине, утын әҙерләргә лә. Айыуһаҙында ҡыуышта ятып, төнөн айыу маҙаһыҙлай башлағас, һуңынан Муйылтүбәләге йортҡа барып йоҡлап бесән эшләй торғайныҡ. Картуф сәсеү, утау, йыйып алыу - беҙҙең мотлаҡ үтәй торған эш булды. Әлеге Кәбир ҡустының өйө алдындағы иҫке өйөбөҙҙөң ағасын да атай менән Оҙонсал буйындағы ҡаршы тауҙа йығып, арҡанға бәйләп шыуҙырып төшөрҙөк. Атай урмандан алып ҡайтҡан ҡоро утынды станға һалып, арҡыры бысҡы менән бәләкәйҙән бысып сыныҡҡанлыҡтан, Әбделмәмбәттә ятаҡта ятып уҡығанда йыуан-йыуан ҡайындарҙы бысыу беҙҙең өсөн "шүтнә" ине. Ятағыбыҙ тау өҫтөндә бит инде, көн дә аҫтағы Оло йылғанан көйәнтәләп һыу ташыныҡ, үҙебеҙ өсөн күп итеп йәшелсә, кәбеҫтә, картуф үҫтерҙек. Кәбеҫтәне турап тоҙлау ҙа беҙҙең эш булды. Эшләгәс, ашауға ла әрһеҙбеҙ, көн һайын тиерлек кәбеҫтәле аш бешерерҙәр ине, яратып ашаныҡ. Ашнаҡсылар Роза менән Хөснә апайҙарҙың теленде йоторлоҡ шул тәмле аштарын бөгөн булһа һағынам. Ятағыбыҙҙың кәртәһендә башмаҡ ҙурлыҡ сусҡалар көттөк, уларға ла ашарға алмашлап беҙ һала торғайныҡ. Ятаҡ һәм мәктәп өсөн яҙ һайын урманға сығып, утын әҙерләнек, машинаға тейәп ташыныҡ. Бер эштән дә, бер ниндәй ҙә тормош ҡытыршылығынан да ҡурҡмай, донъя көтөргә өйрәнеп үҫтек. Ә колхозыбыҙ беҙҙе күпме тотондо: миндек бәйләнек, силос һалыуҙа, бесәндә йөрөнөк, яландарҙы таштан таҙарттыҡ, хатта мал йәйләүҙән ҡайтыуға ферманы таҙалап ҡуйыу ҙа беҙҙең елкәлә ине. Өмәләргә алып сыҡтылар, тимурсылар булып та йөрөнөк.

Шул ваҡыттарҙы уйлайым да хайран ҡалам, хәҙер балаларға тегене ашатырға ярамай, быны ашатырға ярамай, эшләтергә ярамай, нимәне генә алма - ярамай ҙа ярамай... Балаға тауышынды күтәреңкерәп өндәшергә лә ярамай. Беҙ бәпәйҙәр, дөрөҫөрәге, мәмәй, тормошҡа яраҡһыҙ кешеләр тәрбиәләйбеҙ түгелме? Балалар өсөн үҙебеҙ йүгерәбеҙ, үҙебеҙ эшләйбеҙ. Ғилми-эҙләнеү эше булһынмы, олимпиада, БДИ эштәре булһынмы - барыһын да, йәшерен-батырыны юҡ, үҙебеҙ башҡарып ҡуябыҙ ҙа баһа. Яңы йылға сувенир шыршы эшләү, бүтән төрлө ҡул эштәре конкурсына әсәйҙәр ҙә әүҙем ҡушылып китә, балаларыбыҙ өсөн үҙебеҙ һүрәттәр төшөрәбеҙ, шиғырҙар яҙабыҙ. Һәм уларҙы данға күмәбеҙ. Хәтеремдә, 5-се класта уҡыған сағымда "Таң"да - "Юлай ниңә илай?", 7-се лә уҡығанымда "Башҡортостан пионеры"нда "Һуғыш" исемле шиғырҙарым баҫылды, район гәзитендә мәктәп тормошонан мәҡәләләр сығара инем. Минең өсөн бер кем дә яҙып бирмәне. Уҡытыусыларым хатта минең ижад иткәнемде белмәнеләр ҙә, ҡыҙыҡһынманылар ҙа шикелле. Ә бит бер дәфтәр итеп шиғыр юлдары менән әкиәт тә яҙғайным. Тик ул үҙем өсөн генә һымаҡ булды ла, аҙаҡ юғалды. Башҡорт теле уҡытыусыһы инша яҙырға ҡушһа, эй ҡыуаныр инем. Ялға ҡайтҡас, Ташморондоң иң түбәһендә, ялбыр ҡарағас төбөнә ятып рәхәтләнеп яҙғаным хәтерҙә. 12 битлек дәфтәрҙе тултырып, икенсе дәфтәрҙең өс-дүрт битенә сығарып яҙғайным ул иншамды. Уҡытыусымдан башҡа бер кем дә белмәне лә, күрмәне лә минең был эште, һин - ижадсы, тимәне. Маҡтап шашындырмауҙары ла бик яҡшы булған тим бөгөн. Ә хәҙер балаға үҙебеҙ эшләп бирәбеҙ ҙә, конкурста еңдерәбеҙ. Бәләкәй генә "эшенә" лә яңғырауыҡлы һүҙҙәрҙе матур итеп яҙып, Маҡтау ҡағыҙы тотторабыҙ, хатта район гәзитенә ҙур итеп яҙып сығарабыҙ. Уҡыусының шул ялған эшенә таянып, уҡытыусы үҙенең эшен күрһәтә, маҡтала, хатта юғары исемдәр алырға ла мөмкин. Ә баланы урлашырға, алдашырға өйрәтеүебеҙ хаҡында уның башына ла инеп сыҡмайҙыр.

Балаларыбыҙҙы өйҙә лә эшкә бигүк ҡушып бармайбыҙ, ҡулында телефон, компьютерҙа уйын уйнауҙан бушамай. Хатта мәктәптән күптән сығып киткән, армиянан ҡайтҡан малайҙарыбыҙҙы ла эшкә бик йәлеп итмәйбеҙ. Өйгә нигеҙ ҡорғанда, бура күтәргәндә эштә ҡатнашмай, өйҙән сыҡмай ятҡан малайҙарҙы күргәнем бар. Техникаға таянып, бесәнде лә атайҙар үҙҙәре генә эшләүгә күсеп бара. Мал һуйғанда ла малайҙар ситтәрәк йөрөй. Тағы иҫкә төшә: атай тере саҡта беҙ кәзәне күп көттөк, беҙҙең ала кәзәләребеҙ үҙҙәре айырым төркөм булып, тау ҡыҙырып йөрөй торғайны. Атай кәзә салып, тиреһен һыҙырғанда Кәбир ҡустым менән икебеҙҙе эргәһенән ебәрмәне, кәзәнең тояғынан тотоп торор инек, мал һуйырға өйрәнһендәр, тигәндер инде, бахыр. Берәүҙең: "Мөнир ағай, минең малайҙан машинаңды ремонтлатҡанһың", - тип ярһып көйәләнеп тороуын онотмайым. Ул "бала йәнле" атайҙың "эшләгәне миңә - өйрәнгәне үҙенә" тигәнде уйламауы, белмәүе һағайта. Ә бына йәлләгән улының араҡы эсеп, тәмәке тартып, урам буйлап йөрөүен белмәмеш тә күрмәмеш. Бар, әлбиттә, малайҙарының киләсәген хәстәрләп, бәләкәстән мәрхәмәтлеккә, тормошҡа, эшкә өйрәткән, рулгә ултыртҡан, техника ремонтлатҡан бына тигән атайҙар. Ундайҙарға афариндан башҡа ни әйтәһең.

Әммә барыбер ҙә борсоғаны: баланың бәләкәй генә эшен дә ҙур итеп баһалап, унда мин-минлек барлыҡҡа килтереүебеҙ, уның өсөн күбеһен үҙебеҙ эшләүебеҙ, һәр эшен аҡса һәм Маҡтау ҡағыҙы менән баһалауыбыҙ, физик эштә сыныҡтырмауыбыҙ. Кемдәр тәрбиәләйбеҙ беҙ? Баяғы бәләкәй генә утты ла һүндереү сараһын тапмаған һәм белмәгән офис хеҙмәткәреләй эшкинмәгән мәмәйҙәрҙеме? Уйланайыҡ, йәмәғәт!

**Мөнир ФӘЙЗУЛЛИН,**
**уҡытыусы, журналист.**

*✓ Ҡыҙ һыуға төшкән кеүек ғәйеп булды ла ҡуйҙы. Ахырҙа, Абдрахман: "Ҡабаттан көрешергә яҙмаһын", - тип, бәддоға әйтеп, ҡул һелтәне.*



Ауыр һын аҫтында баҫылып ҡалғас, Көнбикә, еңгәләре өйрәткәнсә, күҙҙәрен сытырлатып йоморға ла күпмелер ваҡыт түҙергә булып, үҙен ҡулға алырға иткәйне лә, тик... ике яҡҡа яҙылып һуҙылған ҡулдары тирмә балаҫы өҫтөндә ашығып ярҙам эҙләне... һәм тапты. Бармаҡ остары бая ситкә ташланған хәнйәр һалҡынлығын тойоу менән, ҡыҙҙың аңы үҙенә буйһонмаҫ булып томаланды ла ҡуйҙы. Шул халәтендә ул хәнйәр һабын усына ҡыҫып алып, төбөнә ҡәҙәр өҫтөндәгенең муйынына ултыртты. Ҡорбанының күлдәген өҙгөләп-йолҡҡолап маташҡан көсләүсе, ҙур башын артҡа сайҡап, бер-ике генә ғырылданы ла, яағынан да ауырыраҡ булып, һәленеп төштө. Ә ҡыҙ, ҡапылда нимәләр булғанын аңларға тырышып, өҫтөнә аҡҡан ҡанға ҡойоноп ята бирҙе. Унан, үле кәүҙә аҫтынан көскә шылып сығып, ҡалтыранған ҡанлы ҡулдары менән берсә башын, берсә битен, беләктәрен ыуаланы. Күҙен йоҙтөбән яткан киң арҡанан, хәнйәр сосорайып торған йыуан муйындан ала алманы. Ҡалтыраныуы бөтә тәненә таралып, тештерен шаҡылдатты. Шулай күпме ултырғандыр, яйлап аңы асылып, ысынбарлыҡҡа ҡайта төшкәс, нимә ҡылғанын аңларлыҡ булды. Ул кейәүен сәнсте. Кейәүен генә түгел, ҡорға килгән үҫергән бейен үлтерҙе! А-а-аһ!.. Үлтерҙе... Төҙәтә алмаҫлыҡ хата эшләне. Хәҙер, таң атыуға, еңгәләре килер ҙә, был хәлде күреп, йөрәктәре ярылыр. Атаһына хәбәр итерҙәр, унының сәсе ағарыр. Нишләтерҙәр уны? Ат ҡойроғона бәйләп ебәрерҙәрме, әллә таш менән атырҙармы? Нимә эшләтһәләр ҙә эшләтһендәр, тик атаһына ғына күрһәтмәһендәр. Юҡ, атаһының йөҙөнә ҡарарлыҡ көсө юҡ уның. Ҡасырға?.. Ҡасырға! Алыҫҡараҡ, ҡырғараҡ... атаһына күренмәҫкә, йөҙөнә ҡарамаҫҡа...

Бер ынтылыуҙа муйында торған хәнйәрҙе һурып алды ла, тирмә кейеҙен буйҙан буйға ҡырҡып, шул ектән ҡыҫылып, тышҡа сыҡты. Эстәге ҡан еҫенә үкмәшкән һауанан һуң саф ел битенә килеп бәрелде, ярты башының ауыр томомдан яҙып өлпөрәгән сәсен туҙғытты. Күкрәген тултырып тын алды ла, эҙәм осрамаҫтай яҡты самалап алып, урманға ҡарай йүгерҙе. Күпме ара үткәндер ул, ағас-сатырҙарға һуғылып, тәпһәләргә эләгеп ҡолап, һаҙлы-һыулы ерҙәрҙә бата-сума талсыҡҡансы йүгерҙе лә йүгерҙе. Ахырҙа, бер тау үренә етеп, хәлһеҙләнеп ҡоланы. Ятыптып салҡан әйләнде, күк йөҙөнә һибелеп, моңһоҙ ғына емелдәшкән йондоҙҙарға төбәлеп тә бер килке ятты. Шундай быуындары таралған, ҡыл ҡыбырлатыр ҙа хәле юҡ кеүек. Былай инде бер ҡайҙа ла бара алмаҫ. Ошо тирәлә, түбәндәрәк күл булырға тейеш, шунда барып етә алһа, төшөр ҙә тынысланыр ине. Нишләп был уй башына баяраҡ килмәгән? Бына ла һуң ҡотолоу юлы - күл, күл...

Аҡтыҡ көсөнә ҡалҡынып, тәнтерәкләп түбәнгә китте. Ана, ул күл сак ҡына аҫтараҡ, дымлы еле килеп етә, саҡ ҡына, саҡ ҡына... Хатта ҡулын да алға һуҙған ине, ҡапыл ҡаршыһына, ҡараңғылыҡ йыртып, дәү бер һын пәйҙә булды ла һыңҡылдатҡансы төкөп тә ауҙарҙы. Әле генә әлһерәп килгән Көнбикәлә һунарсының һаҡланыу һәләте уяндымы, ул "йәлп" итеп кире аяғына баҫты ла, тегенең, алыҫая биреп, кире килгәнен көтөп, һағайып ҡалды. Туп-туп итеп кире яҡынлашты был. Күҙҙәрен киң асып, шул яҡҡа төбәлгән ҡыҙ, теге килеп еткәнсе, уның һыбайлы икәнлеген аңғарҙы. Сүгәләй биреп, атының теҙгененән алырға тип әҙерләнгәндә, әлеге мал был юлы килеп етер-етмәҫтән туҡтап, тапанып ҡалды. Туҡта! Был бит...

- Буҙайғыр! - Ҡыҙ һағайып ҡына малға яҡынланы, - Буҙайғыр?.. Был һинме, Буҙайғыр?..

Ат сиҙәмле йомшаҡ ерҙе һеңкетә баҫып урынында тапанды, танауынан һыҙғырған тауыштар сығарҙы. Йә һөжүм итә алмай, йә боролоп китә алмай өйөрөлдө.

Көнбикә уға яҡынлашҡандан-яҡынлашты:

- Кил әле бында... Буҙайғыр, был һин бит... Кил... Кил минә...

Бына ул бейек ғифриттең яңағына ҡағылды, ус йөҙө менән муйынынан үтте. Айғыр, моронон сөйөп, артҡараҡ шылды, фырылданы.

- Буҙайғыр, аҡыллым, һин белмәйһең нимәләр булғанын... Һин белмәйһең... Буҙайғыр?.. Ҡалайтырға?..

Илап-зыулап ялына йөбешкән ҡыҙҙың ни һөйләгәнен аңламаһа ла, уның үҙенә ышанып һарылғанын төшөндөмө йылҡы, шым булып, үнәсен һуҙа биреп ҡалды. Унан был, сапсан сая әҙәм, елкә бөгәренә бармаҡтарын батыра төшөп, һикереп арҡаһына менеп ултырҙы та, алып ташларға ашыҡманы. Башта һыр бирмәү өсөн генә үрәпсене лә, өҫтөндәге теҙҙәрен ҡыҫа төшөп һылашып яткас, ҡапыл алға ырғып, юртып китте. Бара биргәс, тау-таш яңғыратып кешнәп ебәрҙе. Уға яуап итеп тегенән-бынан шундай уҡ ауаздар килде. Артында гөрһөлдәгән тауышҡа боролоп ҡараһа, хайран булды Көнбикә. Айғыр артынан бөтөн өйөрөн дә эйәрткән ине. Улары, йөшенле ямғыр шикелле булып, геүләп-даһырлап килә.

Аллағол, атаһы менән ҡырҡа һүҙгә килешеп, никах башланмаҫ борон уҡ байрамды ташлап ҡайтып киткәйне. Аҡһаҡалдарҙың эште былайға бороуы ла, атаһының шулар ыңғайына тороуы ла башына һыйманы. Тоҡанға ышаныу мөмкин түгел ине, уныңса. Хатта Көнбикә уның ҡәрендәше булмаған хәлдә лә, әллә ҡайҙа иткән, улар менән уртаҡ көнө-эше булмаған үҫергәндәр менән туғанлашыу файҙаһыҙ эш, тип ҡараны. Ә инде ҡыҙҙың уның берҙән-бер яратҡан һеңлеһе булыуы бигерәк тә өҙҙө үҙәген. Уларҙың ҡырҙа йөрөгән ҡоралай шикелле генә туғаны шул ҡояшҡа ҡарайған ит мискәһенә була торғаны бармы? Үлтереп, ергә һалыу яҡшыраҡ түгелме был хәлдән?

Уға Айыухан да эйәрҙе. Ауырлы ҡатынын әсәләре ҡашында ҡалдырып, үҙе һыбай Аллағол былауҙарын оҙата киткәйне. Ирҙәр көн оҙоно өйрәтеүгә тай айырыу менән булды. Мал, ер-һыу, ҡорҙа ҡаралған мәсьәләләр хаҡында һөйләштеләр, ләкин икеһе лә Көнбикәнең Тоҡанға бирелеүе тураһында һүҙ ҡуҙғатманы. Һәр береһе был хәлде үҙ эсенә йомдо. Тыштан йөшәйештә була торған ғәҙәти хәл итеп күрһәтергә тырышты. Кем ҡыҙын кемгә бирмәгән? Бығаса нисә быуат шулай булған һәм артабан да шулай булыр. Уларға бирелгән ҡатындарҙан рөхсәт һорап торғандармы ла, үҙҙәре киләсәктә балаларынан ризалыҡ алып торорҙармы?

Эңер алдынан тамаҡ сылатыуға тирмәгә инеп ултырғайнылар ғына, ҡараул ярҙамсыһы атылып килеп инде:

- Бай! Ҡырҙа йылҡы өйөрө күренде! Бик ҙур өйөр, бында ҡарай елә.

- Кемдең өйөрө? - Аллағол, һауытына эйелгән башын да ҡалҡыта алмай, аптырап һораны.

- Белмәйем.

Ирҙәр ашығып тышҡа сыҡты, тик менгеләренә һикереп өлгөрмәнеләр, өйөр күтәргән саң болото йәйләүгә яҡынлашып, алдағы малдар күҙгә салынғайны инде. Барыһы ла шаҡ ҡатышып, ер ябып килгән сапҡынға төбәлеп ҡалды. Һәм күҙ алдарына асылған күренешкә ышана алмай торҙолар. Йылҡы алдынан ер емертеп юртып килгән дейеү ҙурлыҡ айғырҙа Көнбикә елә ине. Ҡасандыр аҡ булған күлдәге йыртылып, ҡанға буялып бөткән. Менгеһенең киң арҡаһына киреп ултырған балтырҙары ябыуһыҙ, ап-аҡ булып, әллә ҡайҙан ялтырап килә. Ярты бите тотошлайы менән, нимәләр буялып, ҡарайып ҡатҡан. Бер томомо юҡ, шул яҡ сәсе туҙған...

Ни булғанын төшөнмәһә лә, бәлә барлығын самалаған Аллағол, айғырға ҡаршы ашыҡты. Менге йәнәшләү менән, ынтылып, һыбайлыһын һөйрәп алды. Тегеһе ҡапылдан аяҡтарына баҫа алмай, сүгәләп төштө. Ағаһы яурынбаштарынан ҡыҫып тотоп, тартып торғоҙҙо:

- Көнөкәй! Көнөкәй, нимә булды?




Көнбикә иҫен юйып барыуҙан йомола башлаған күҙҙәрен көскә асып, шыбырлап өлгөрҙө:

- Үлтерҙем... мин... үлтерҙем уны...

Шул хәбәренән һуң ағаһының ҡулдарына һулып төштө.

Аллағол, ҡыҙҙы күтәреп, тирмәгә йүгерҙе. Бөтөн был күренештең шаһиты булған Айыухан да, хәл нисек кенә сәйер булмаһын, ҡаушауын тышҡа сығарманы, эйәрмәне лә. Айғыр артынан килеп етеп, яланды тултырғандан-тултыра барған өйөргә ҡарап, ялсыларға фарман бирҙе:

- Ҡыуығыҙ айғырҙы, ыртҡа бороп ебәрегеҙ, алып китһен өйөрөн.

Үҙе тирмә янында йүгерешкән ҡатынҡыҙҙы күҙәтеп торҙо ла, ҡунаҡ тирмәһенә юлланды. Нимәләр булған унда, Абдрахман йәйләүендә. Тик нимә?

Шул уйҙар менән баш ватып ултырғанда Аллағол килеп инде. Йөҙө үтә лә борсоулы ине. Айыухан уға төбәлеп ҡалды.

- Көнбикә Тоҡанды сәнскән.

Ирҙәр һаман ҡарашып тора бирҙе. Ниһайәт, икенсеһе телгә килә алды:

- Нисек... сәнскән?

- Шулай, үлтергән.

Айыухан былай барҙы, тегеләй үтте лә кире ҡаршыға килеп баҫты:

- Нимә була инде хәҙер, ә, Аллағол?

- Белмәйем...

Ирҙәр, түшәктәргә сүгәләп, тынып ҡалды. Тик күпме генә ултырһалар ҙа, бер нәмә лә уйлап таба алмайҙар ине.

- Хәҙер үҫергәндәр беҙҙе һатлыҡ йәнлектә ғәйепләйәсәк, яу алдынан үҙара ыҙғыш сығыр инде.

- Көнбикәне нишләтерҙәр икән? - Айыухан бөтөн кәүҙәһе менән дуҫына борολдо, уны әлеге ваҡытта күберәк ошо һорау борсой.

- Яҙаһын сығарырҙар инде... Тик мин инде уны рәнйетергә бирмәм, - Аллағолдоң тауышы ҡаты сыҡты.

- Мин дә...

* * *

Был мәл көндөң ахыры ине. Ә уның башы икенсе йәйләүҙә ошолай башланды.

Ҡунаҡ ҡарап арыған Абдрахман, артыҡ ашап-эсеүҙән дә ярайһы уҡ ауырайып, эсендә урғыған утын баҫып йөрөп тә хәле бөттөмө, таң беленә башлауға ятып киткәйне. Тик йоҡлап өлгөрҙөмө-юҡмы, Һатыбалы, икенсе улы килеп уятты. Уятты ла эҙәм ышанмаҫ хәбәр еткерҙе:

- Тоҡан бей үлтерелгән.

- Ҡайҙа? Нисек үлтерелгән? - Абдрахман йоҡо аралаш буталды.

- Тирмәлә ята, муйынына сәнселгән.

- Көнөкәй? Көнөкәй ҡайҙа? Тереме?

- Ул юҡ.

Йәйләү ситендәге тирмәгә ҡарай малайҙар шикелле сапты бей. Ахылдап барып инһә, кейәү булғаны ысынлап ҡанға туҙып ята. Улдарының береһе тирмәнең ҡырҡылған ерен күрһәтте. Ултыра төштө Абдрахман:

- Ах-х! Бисура!

Асыуы алҡымына килеп ыҫылданы:

- Табығыҙ! Ер аҫтынан булһа ла табып алып килегеҙ! Быуам! Үҙ ҡулдарым менән быуып, ергә һалам!..

Күҙ асып йомғансы, хәбәр йәйләүҙе урап сыҡты ла, халыҡ кәләш тирмәһе янына йыйыла башланы. Барыһы ла асыҡланып, фараздар ҡылынғас, аҡһаҡалдар башта бейҙе тәрбиәләп ерләргә, унан, тереме-үлеме, ҡыҙҙы табып алып килергә ҡушты. Артабанғы яҙмыштар шул арала хәл ителәсәк ине.

Тоҡанды ерләп ҡуйҙылар, әммә ҡасҡын табылманы. Аллағолға булыу мөмкинлеген самалап, унда ла барып ҡаранылар, әммә эҙенә төшә алманылар. Аҡһаҡалдар менән кәңәшләшеп, Тоҡан бейҙең үлеме хаҡындағы хәбәрҙе ырыуына үҙе алып китте. Уға, нығышып, улдарының береһе лә эйәрҙе. Ҙур булмаған төркөм менән томанлы таңғы иртәлә юлға сыҡты улар. Ауыр кисерештәр ҡосағында, яҡындары менән йүнләп бәхилләшмәй ҙә, ҡатындарына бөтөнләй күҙ ҙә күтәреп ҡарамай, һуңғы көндәрҙә яҙылмаған да ҡаштары аҫтынан һөҙә ҡарап сығып киткәйне. Ошо китеүенең мәңгелеккә булыуын белмәгәс...

Аҙна тигәндә арманһыҙ булып барып төштөләр улар үҫергәндәр еренә. Уғаса икһеҙ-сикһеҙ далаларҙы, ағасһыҙ таулыҡтарҙы, эреле-ваҡлы йылғаларҙы үттеләр. Тоҡандың үлемен ишеткән кейәүҙәре йыйылды. Артыҡ бошонған кеше булманы, шулай ҙа һорау алдылар.

- Үлтереүсе ҡыҙҙы, атаһы менән бергә, тереләй күмделәрме?

- Ҡыҙ табылманы.

- Атаһын нишләттеләр?

- Атаһы мин үҙем.

Был яуаптан үҫергәндәр өнһөҙ булып уға ҡарап, бер килке ултырып алды. Унан тағы дауам иттеләр:

- Ҡорҙа нимә хәл ителде? Башҡорт иле ҡалайтмаҡсы?

- Яуға әҙерлек бара, былтырҙан алып инде. Тик бәрелеште булдырмаҫҡа, баҫҡынсыларҙың шартына риза булырға килешелде.

Шунда Тоҡандың өлкән кейәүе мыҫҡыллы йылмайып әйтте лә һалды:

- Бәрелеш былай ҙа булмаясаҡ ул. Баҫҡынсыларҙың яу юлы дингеҙ ярына сыҡмаҫы былай ҙа билгеле.

- Улай булғас, ни өсөн Тоҡан бей беҙҙе яуға күтәрә? - Абдрахман ярһыуынан ҡалҡына биреп уҡ ҡуйҙы.

- Ә уныһын бейҙең үҙенән һорап ҡалырға ине, - бының мәрәкәһенә башҡалар ҙа ҡушылып, ауыҙ йырҙы.

- Бер халыҡ була тороп, һеҙгә беҙҙең ил ташлап сығыуыбыҙ нимәгә?

- Илдә ҡораллы көс булмауы нимә өсөн кәрәк һуң, бей? Ошо йәшеңә етеп, шуны ла аңламанныңмы ни?

**(Дауамы бар).**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҺИМЕҘҘӘР КҮБӘЙӘ

■ Ҡартайыуҙың төп билдәләре - сәс һирәгәйеүе һәм тирелә йыйырсыҡтар барлыҡҡа килеүе. Алабама университеты ғалимдары билдәләүенсә, был процестарҙы митохондриялар - күҙәнәктәрҙең "энергетик фабрикалары" эшмәкәрлегендәге тайпылыштар барлыҡҡа килтерә. Тап ошо тайпылыштар һөҙөмтәһендә өлкән йәштәгеләрҙә арыу, тышҡы ҡиәфәттәге үҙгәрештәр, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре, яман шеш осрай. Һынауҙар ҡомаҡтарҙа үткәрелә. Уларға митохондриаль дисфункцияға килтереүсе антибиотик биргәндәр. 4 аҙнанан ҡомаҡтарҙа ҡарт ҡомаҡтарға хас бөтөн билдәләр барлыҡҡа килгән. Йөндәре салланған, һирәгәйгән, тире йыйырсыҡланған, йәнлектәр күпселек ваҡытты йоҡлап үткәргән. Препарат бирелмәй башлағас, яһалма рәүештә ҡартайыу процесы туҡтаған, күпмелер ваҡыттан һуң ҡомаҡтарҙың тиреһе матурайған.

■ Көн һайын шәкәрләп сәй эсеү Альцгеймер ауырыуына килтереүе ихтимал. Колумбия университеты ғалимдары билдәләүенсә, ризыҡтағы һәм эсемлектәрҙәге шәкәр аҡыл ҡеүәһенә насар йоғонто яһай. Көнөнә 2,5 ҡалаҡ шәкәр ҙа организмға зыян итә. Ғалимдар иҫкәртә: шәкәрҙең бөтөн төрҙәре, шулай уҡ емеш һутынан лимонадҡа тиклем бөтөн татлы эсемлектәр зарарлы.

■ Рәсәйҙә һимеҙ кешеләр арта. Статистика буйынса, былтыр рәсми рәүештә һимеҙлек диагнозы ҡуйылған кешеләр иҫәбе 2 миллионға еткән. Уларҙың иң күбе Алтай крайында (5,4%). Артабан Магадан (3,4%) менән Ҡурған өлкәләре (2,8%) килә. Эксперттар әйтеүенсә, 85 төбәктең 35-ендә бер йылда ғына ла һимеҙҙәр иҫәбе 10 процентҡа артҡан. Ҡабарҙы-Балҡар, Курск, Смоленск, Иваново, Кострома, Ульянов, Калуга, Ярославль өлкәләрендә был һан 25 процентҡа еткән. Ненец автономлы округында 2016 йылда был диагноз 1 кешегә генә ҡуйылған. Хәҙер һимеҙҙәр һаны 536 кеше. Һимеҙҙәр Мәскәүҙә аҙ (0,5%). Белгестәрҙе шул да хафаға һала - һимеҙлек балалар һәм үҫмерҙәр араһында йыш осрай. Ҡайһы бер төбәктәрҙә һимеҙҙәрҙең яртыһын балалар алып тора. 14 төбәктә балалар дөйөм һандың өстән бер өлөшө. Төньяҡ Осетия, Башҡортостан, Тыва, Ҡрым республикаларында, Калуга, Брянск, Ульянов, Волгоград өлкәһендә, Пермь крайында хәл ошолай.

■ Ватерлоо университеты белгестәре, насар кәйеф иғтибарҙы тупларға, ваҡытты дөрөҫ ҡулланырға өйрәтә, тип белдерә. Ысынында иһә, күтәренке кәйефтәге кеше ойоштороу эштәрен насарыраҡ башҡара икән. Әммә был күренеш экстраверттарға ғына хас. Интроверттар, киреһенсә, насар кәйефтә бер нәмә лә эшләй алмай. Фәндә эмоциональ реактивлыҡ тигән термин бар. Был - кешенең кәйефе менән бәйле хистәр реакцияһының оҙайлығы. Темпераментына ҡарап, төрлө кеше төрлөсә хистәр кисерә. Әйтәйек, экстраверттар көслө хистәр ҡойононда ҡайнай, ә интроверттар тынысыраҡтар. Бына ошо ике темпераментлы кешеләрҙе ике төркөмгә бүлеп, эксперимент яһағандар. Экстраверттар төркөмө насар кәйефтә булғанда функциональ тестарҙы яҡшыраҡ башҡарған. Интроверттарҙың кәйефе насар булһа, ҡулдарына эш бармай икән.

*ЙОЛА ТОТҠАН ЯҘЛЫҠМАҪ*

# АТАЙҘАН КҮРЕП УҠ ЮНАЛАР,

## әсәйҙән күреп күлдәк бесәләр хәҙер

**Ошо көндәрҙә Учалы районында "Ай, Уралым, Уралым!" этнофестивале уҙғарылды. Был сара Азия һәм Европа ҡитғалары сигендә, Баҡшай яланында икенсе тапҡыр ойошторолдо. Унда ҡатнашҡан һәр кем боронғо йолаларын тотоп ғүмер иткән, моңло һәм талантлы, мәргән ир-егеттәргә һәм оҫта ҡуллы ҡатын-ҡыҙҙарға бай Учалы халҡының рухын, күңел йылыһын тойоп, илһам һәм дәрт алып ҡайтты. Сарала БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың Мәғариф, мәҙәниәт, спорт һәм йәштәр сәйәсәте буйынса комитеты рәйесе Эльвира Айытҡолова, Пермь крайы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Рәсил Мөхәмәтйәнов, Татарстан башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Ғәли Хәсәнов, "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы рәйесе Гөлфиә Янбаева, Учалы районы хакимиәте хеҙмәткәрҙәре ҡатнашты.**

"Ай, Уралым, Уралым!" этно-фестивале өс көнлөк итеп ойошторолдо һәм ярышҡа сәмләнеп килгән уҡсыларҙың команда ярыштарынан башланып китте. Күп тапҡырҙар төрлө кимәлдәге бәйгеләрҙә мәргәнлеген һынап өлгөргән оҫта уҡсылар ҙа, ҡыҙыҡһыныып яңы ғына ҡулына уҡ-һаҙаҡ алғандар ҙа дүрт кешенән торған командаларға тупланып һынауҙар үтте. Һөҙөмтәлә, Учалы ҡалаһы уғатарҙары Рәйес Низаметдинов, Лилиә Низаметдинова, Самат Ғатауллин, Руслан Әхмәҙиев иң күп мәрәй йыйып, майҙан хужаларының исеменә тап төшөрмәй еңеү яуланы. Шәмбе көн Баҡшай яланына төрлө тарафтарҙан йыйылған халыҡ байрамдың асылыу тантанаһынан да алдараҡ килеп еткәйне. Баштан уҡ сараның төп сәхнәһе күҙгә ташланды, сөнки уны ойоштороусылар хас башҡорт тирмәһе кеүек биҙәгән. Бында башҡорттарҙың йорт ҡаралтылары, йыһаздары, көнкүреш әйберҙәрен күргәс тә, хужаларҙың һәр тамашасы үҙен өйөндә кеүек иркен тойһон, байрамдан йәм табып, күңеле булып ҡайтһын, тигән изге теләген тәсүрләнек. "Ай, Уралым, Уралым!" этно-фестивален тантаналы рәүештә асыҡ тип иғлан итеп, "Ләйсән" халыҡ бейеү ансамбленең дәрте сығышын ҡарап, уғатарҙарҙы рухлы йыр менән ярыштарын дауам итергә оҙатҡас, сараның иң ҡыҙыҡ өлөшө башланды. Сәхнә тулыһынса Учалы районының ҡырҡ биш ауыл мәҙәниәт йорто һәм клубтары фольклор коллективтарының биләмәһенә әүерелде. Төш ауғанса бер туҡтауһыҙ йырлап-бейеп, ауылдарында һаҡланып ҡалған үҙенсәлекле йолаларҙы күрһәтеп тамашасыларҙың иҫен китерҙе бит был учалылар! Хәҙер инде ошо төбәктән сыҡҡан билдәле сәнғәт эйәләренең ижад ҡомары ниҙә икән, тип баш ватаһы ла түгел: улар ошо тупраҡтан, ауылдаштарынан, борондан һаҡланып килгән йола, ғөрөф-ғәҙәттәрҙән илһам ала. Сөнки шундай талантлы халыҡтың ул-ҡыҙҙары була тороп, күңелендә моң йөрөтмәү мөмкин түгелдер. "Фольклорҙың бер көнө" конкурсы финалында көс һынашасаҡтары тураһында белгәс тә, һәр ауылдың коллективы ныҡлы әҙерләнгән. Улар мотлаҡ рәүештә ошо төбәккә хас йоланы, ғәҙәтте сәхнәләштергән, йыр-бейеү өйрәнгән. Беренсе булып сәхнәгә күтәрелгән Ғәлиәхмәр ауылының ижад коллективы "Талҡан өмәһе" тигән йола күрһәтте. Улар ауылдың оҫта ҡуллы хужабикәләренең талҡан эшләү серен, әрме хеҙмәтенә киткән егеттәрҙең юл төйөнсәгендә был ризыҡ ни өсөн мотлаҡ булырға тейешлеге тураһында ғына түгел, Ғәлиәхмәр ауылында бер ҡомартҡы булып һаҡланған таш тирмәндең тарихына тиклем бәйән итте. Әйткәндәй, тап ошо фольклор коллективы конкурстың Гран-приһын яуланы. "Фольклорҙың бер көнө" конкурсында тағы ла "Ҡымыҙ бешеү" (Яңы Байрамғол ауылы), "Ҡурайға барыу" (Илсеғол ауылы), "Балыҡ тотоу" (Иҫке Байрамғол ауылы), "Ҡорама ҡорау" (Ҡорама ауылы), "Йыуаса йолаһы" (Ҡаҙаҡкол ауылы), "Еләк йыйыу" (Ҡәйепҡол ауылы), "Әбейҙәр сыуағы" (Уральск ауылы), "Килен төшөрөү" (Ураҙ ауылы) тигән йолалар сәхнәләштерелде. Был атамаларға ҡарап та, һәр эштең үҙ тәртибе булыуын күҙалларға мөмкин. "Улым һинә әйтәм, киленем һин тыңла" тигәндәй, сәхнә тирәһендә күберәк оло йәштәге кешеләр тамаша ҡылһа ла, ошонда ата-әсәһенә эйәреп килгән балалар, йәш-елкенсәк тә ҡолаҡ һалмай ҡалмағандыр. Башҡорт дәүләт университетының Учалы ҡалаһындағы бүлеге уҡытыусыһы Азат Ғарипов әйткәнсә, глобализация осоронда, халыҡтар үҙенең фиғелен, туған телен юғалтып барған заманда башҡорт кешеһенең хәтерендә ошондай төрлө йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр менән бергә халыҡ йырҙары, таҡмаҡтары, бейеүҙәре лә йәшәй икән, шунан да әһәмиәтлерәк нимә булыуы мөмкин?!

"Сәмәр" милли кейем тегеү конкурсы "Ай, Уралым, Уралым!" этно-фестивалене тағы бер йәм өҫтәне. Һуңғы ике йыл эсендә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының борондан һаҡланып килгән милли кейемдәргә иғтибары арта төштө. Быға республика кимәлендә үткәрелгән ярыштарҙың, оҫталыҡ дәрестәре һәм ғилми конференцияларҙың да йоғонтоһо ҙур булды. "Ай, Уралым, Уралым!" этно-фестивален ойоштороусылар ошо хаҡта иҫтәрендә тотоп, "Сәмәр" милли кейем тегеү конкурсын йыл да үткәрә килә. Оҫтабикәләрҙең үҙҙәре теген кейгән кейемдәрен баһалауҙа йыл да ҡатнашыу мөмкинлеге булған жюри ағзалары гүзәл заттарҙың ерле халыҡтың милли кейем үҙенсәлектәрен иҫтә тотоп теккән зауыҡлы кейемдәре йылдан-йыл күбәйеүен оло ҡәнәғәтлек менән телгә алды. Ялтырауыҡлы, сәхнә кейеменә генә әйләнеп барған кейемдәр әләсәйҙәрҙең һандыҡ төбөндә һаҡланған боронғо өлгөләргә ҡарап тегелә башлағас, уны кейгән кешенең йөҙөнә лә нур ҡунғандай, күңелендә рух уянғандай тойола шул. Был юлы ла "Сәмәр" конкурсына күҙ нурын һалып эшләгән яға, ҡашмау, күлдәк, елән, сарыҡ, сәсмәүерҙәрен кейеп сыңғыраһ булып сәхнә түренә күтәрелгән оҫтабикәләргә ҡарап туйғыһыҙ булды. Кейемдәрҙең тәбиғи туҡымаларҙан һәм тарихи өлгөләргә тап килеүен ойоштороусылар конкурстың төп талабы итеп ҡуйған. Баһалама ағзаларына 29 кон-



курсант араһында бер генә еңеүсе билдәләүе еңелдән булманы, бик оҙаҡ кәңәшләшкәндән һуң, беренсе урынды Миндәк ауылынан Таңһылыу Байморатова һәм Яңы Байрамғол ауылынан Хөснә Динисламоваға бирҙеләр. Был оҫта ҡуллы ханымдар әнәһенән ебенә тиклем үҙҙәре тегеп кейенгән. "Яғам бар, был юлы конкурсҡа һаҡал эшләп тағып килдем әле, - тине конкурстан һуң Таңһылыу Байморатова. - Һаҡал беҙҙең тирәлә бик үк кейелмәгән, шулай ҙа ҡыҙыҡһынып эшләнем. Тегенеүемә хәҙер 11 йыл, фольклор коллективына йөрөй башлаған тотондом был шөғөлгә. Кейемде Руденко, Шитова китаптарынан, музейҙарҙа һаҡланған өлгөләргә ҡарап тегәм, Азат Ғарипов менән кәңәшләшеп, барыһын да урынерынә еткереп эшләйем. Ҡайҙа барһам да музейҙарға инеп, унда һаҡланған әйберҙәрҙе ҡарап-өйрәнеп йөрөргә ғәҙәтләнгәнмен. Ҡул эше әүрәтеүсе бер шөғөл, уға бөтә күңелеңде һалып эшләгәндә генә зауыҡлы килеп сыға". Милли кейемдәр тегеүҙе айырым бер һөнәр итеп алған Учалы ҡатын-ҡыҙҙары үҙ төбәктәренә генә хас кейемдең биҙәлеш үҙенсәлектәренә лә иғтибар итә, сөнки башҡорт халҡының милли кейеме кешенең ниндәй ырыуҙан, йәшәгән төбәгенә ҡарап та айырылып торған. Илтабан ауылы ағинәйе Венера Йосопова хәтерләүе буйынса, итәктәре сигеүле күлдәк кейгән өләсәһе. Шуға ул быны Руденконың китабындағы мәғлүмәттәр менән дә сағыштырып, ошо төбәккә хас булған һыҙат икәнен дәлилләп, үҙенә шундағы үрнәккә ҡарап күлдәк итәген семәрләп тегеп кейгән. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың боронғо өлгөләргә ҡарап теккән милли кейемдәре сағыу һәм ялтыр туҡымаларҙан булмаһа ла, бар майҙандың күҙ яуын алды. Башҡорт ҡыҙының гүзәллеге тигеҙләп теккән мәрйен, семәрләп сиккән биҙәк, тәҫләп теккән балитәкле күлдәк, сыңлап торған сәсмәүерҙә.

Урынһыҙ тегелгән ялтырмаҡ күлдәкте боҙған кеүек, итәғәтһеҙ уйын бала тәрбиәһен боҙа. Был турала "Ай, Уралым, Уралым!" этно-фестивале сиктәрендә ойошторолған "Бәҡшай уйындары" халыҡ уйындары конкурсын үткәреүсе Фәнит Шаһиев та телгә алды. Ул башҡорт халҡының милли балалар уйындары ҙур тәрбиәүи әһәмиәткә эйә булыуы тураһында һөйләне. "Беҙ уйнап үҫкән уйындар хәҙер онотолоп бөтөп бара, ә бит уларҙың һәр береһе фәһемле булған. Мәҫәлән, башҡорттар дүрт осло арҡан тартҡан, был балаларҙы татыулыҡҡа, дуҫлыҡҡа өйрәтә. Малайҙар һыбай йөрөргә әҙерәме юҡмы икәнен тикшереүҙән дә ябай ысулы булған: бала башын эйеп, үҙе тирәләй 15 тапҡыр әйләнеп, һарыҡтың баш һөлдәһенә таяҡ менән һуғырға тейеш. Башы әйләнһә ул тейҙерә алмай, тимәк һыбай йөрөргә лә әле мәле етмәгән. Аттан ҡолап имгәнгәнсе, ошолай уйнап ҡына өйрәнеүе, һынаулыуы яҡшы. Бер ҙә башҡорттар бысаҡ бәрешеп йөрөмәгән, сослоҡҡа, таҫыллыҡҡа, үткерлеккә йүнәлтелгән уйындар уйнап үҫкән. "Ашыҡ" уйыны мәҫәлән, иҫәп-хисапҡа өйрәтә, "Бура һуғыу" таҫыллыҡты, көстө талап итә. Бөгөн балаларға ошоларҙы өйрәтергә тырышабыҙ. Ауылда көтөү килгәнсе клуб эргәһендә йыйылып уйнайҙар былай, үҙҙәренә ҡыҙыҡ. Көнө буйы компьютер артында ултырғансы, урамда саф һауала, бергә йыйылып уйнаһалар аралашыу, дуҫлашыу өсөн дә, сәләмәтлектәренә лә файҙалы бит", - ти Фәнит Арыҫлан улы. Уның балалар уйындарын ойошторо өсөн бөтә кәрәк-яраҡтары бар, ихласлап һәр һораған кешегә уйын тәртибен аңлатырға, күрһәтергә әҙер. Әгәр ҙә милли уйындар тураһында күберәк мәғлүмәт белергә теләгегеҙ булһа, Учалы районының Һәйтәк ауылына юллаңығыҙ, Фәнит Шаһиев тап шунда йәшәй.

